
АМАНАТ
2010
Август
«БАЙЫҠ» БЕЙЕҮ КОНКУРСЫНДА
ЕҢЕҮСЕ МӨХӘММӘТ НӘЗИРОВ
ҮҘЕН ЫСЫН СӘХНӘ ОҪТАҺЫ
ИТЕП ТАНЫТТЫ

# Башҡортостан мәғарифы






Рәсәйҙә – өсөнсө, ә дөйөм күрһәткестәр буйынса туғыҙынсы урында килә.

Физик яҡтан мөмкинлеге сикләнгән балалар өсөн дә белем биреү учреждениелары селтәре һаҡлап ҡалынды һәм үҫеүен дауам итә. Бөгөн 37 махсус (коррекцион) мәктәп бар, былтыр уларҙа 4 меңгә яҡын уҡыусы белем алды.

Башҡортостанда – 1787 балалар баҡсаһы, 1990 мәктәп, интернат-мәктәп, лицей, гимназия, 26 киске мәктәп, 29 балалар йорто, 98 һөнәрселек училищеһы һәм лицейы, 297 өҫтәмә белем биреү учреждениеһы яңы уҡыу йылына аяҡ баҫа. Уларҙа бөтәһе 800 меңдән ашыу кеше белем һәм тәрбиә ала. Быйыл 1 сентябрҙә республикала беренсе синыфҡа 45 меңгә яҡын ҡыҙ һәм малай уҡырға бара.

Ә 2009-10 уҡыу йылында илә туғыҙынсы синыфты – 45 мең 789, урта мәктәпте 27 мең 488 кеше тамамланы. 765 уҡыусы алтын миҙалға эйә булһа, көмөш миҙалға тамамлаусылар һаны – 1587.

2010 йыл һөҙөмтәләре буйынса Башҡортостан Бөтә Рәсәй олимпиадаһында еңеүселәр һәм призерҙар һаны йәһәтенән Рәсәй Федерацияһының иң яҡшы ун төбәге иҫәбенә инде, Бөтә Рәсәй олимпиадаларында 32 уҡыусы еңеүсе һәм призер исемен яуланы. Мәҫәлән, стенд судомоделизмы буйынса Рәсәй чемпионатында бөтә призлы урындарға ла беҙҙекеләр лайыҡ булһа, экология олимпиадаһында 5 призлы урын алыуға өлгәштек.

Башҡортостан байтаҡ йылдар яңы мәктәптәр төҙөү буйынса Рәсәйҙә алдынғы урын биләй. Юғары иҡтисад мәктәбе рейтингы буйынса, республика дөйөм белем биреү буйынса

2010 йылдың Башҡортостанда – Республика йылы, Рәсәйҙә Уҡытыусы йылы тип иғлан ителеүе лә йәмғәтселек тарафынан йылы ҡабул ителде. Бөтә мәктәптәрҙә лә ошоға бәйле төрлө саралар уҙғарыла.

Интернетҡа тоташтырылған бөтә мәктәптәр ҙә лицензион программалар менән тәьмин ителгән. 2009 йылда республика бюджетынан 65 автобус һатып алыу өсөн 55, 7 миллион һум аҡса бүленде. Быйылғы уҡыу йылында ла ауыл мәктәптәрен автобустар менән тәьмин итеү дауам итәсәк.

Яңыраҡ Башҡортостан Президенты информацион коммуникациялар технологияһы нигеҙендә белем биреү процесын ойоштороу өсөн шарттар тыуҙырыу маҡсатында республиканың белем биреү учреждениеларын бер мегабиттан да кәм булмаған юғары тиҙлекле интернет ресурстары менән тәьмин итеү тураһындағы ҡарарға ҡул ҡуйҙы.

**ҺҮРӘТТӘ: Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Зәки улы Хәмитов Саҡмағош ауылы гимназияһында.**

**Булат ҒӘЙНЕТДИНОВ фотоһы.**



## Бейеү сәнғәтенең киләсәге

Күгәрсен районының Морағым тарлауығында Башҡортостан Республикаһы президенты призына балалар араһында “Байыҡ” бейеү телевизион конкурсы быйыл икенсе тапҡыр, киң ҡолас менән үтте. Унда республиканың төрлө төбәктәренән ике йөҙҙән ашыу бейеүсе ҡатнашты. Унан алда ойошторолған һайлап алыу турҙарында биш йөҙләп һәләтле бейеүсенең сығыш яһауы республикала бейеү сәнғәтенең киләсәге барлығын күрһәтә.

Еңеүселәрҙе 3-10 йәшлектәр араһында, 10-15 йәшлектәр араһында, төркөмдәр араһында һәм 16 номинация буйынса билдәләнеләр.

Ансамблдәр араһында Ишембай районының “Тәйрүк” коллективына етеүсе булманы **(һүрәттә)**. Ә кескәй балалар араһында Гран-при Учалы районынан Фидель Кәримовҡа эләкте. Өлкән йәштәге балалар араһынан иһә Гран-приға Йылайыр районынан Мөхәммәт Нәзиров лайыҡ булды **(уны һеҙ журналыбыҙҙың тышлығында күрәһегеҙ)**.

Бәйге барышында балалар өсөн Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле солистары мастер-кластар ойоштороҙо, Чечен, Ҡабарҙы-Балҡар, Дағстан, Швейцариянан йәш бейеүселәр сығыш яһаны.

## Малсылыкта һынау

Июлдә Стәрлетамаҡ районында Уҡыусыларҙың етештереү бригадаларының VI Бөтөн Рәсәй слеты булып үткәйне. Был слет ауыл мәктәптәрендә ауыл хужалығы продукцияһын етештереүҙе әүҙемләштереү, балаларҙы ауыл хужалығына йәлеп итеү маҡсатында ойошторола. Унда Рәсәйҙең 15 төбәгенән йөҙләгән уҡыусы бала ҡатнашты.

Һөнәри оҫталыҡ бәйгеләре ете номинация буйынса үтте: баҡсасы, йәшелсәсе, малсы, ер һөрөүсе, иген үҫтереүсе, машина менән һауыу оҫтаһы, бригадир. Конкурстарҙа теоретик




белемдән тыш, үҙ ҡулдарың менән ниҙер эшләп күрһәтеү ҙә талап ителә ине. Бигерәк тә һауынсыларға һәм механизаторҙарға талаптар юғары булды.

Һөҙөмтәлә машина менән һауыу оҫтаһы тип Бишбүләк районының Айыт ауылынан 11-се синыф уҡыусыһы Эльвира Ғәйнетдинова табылды. Ә уның райондашы, Ҡошйылға ауылының 11-се синыф уҡыусыһы Альбина Семенова үҙен иң яҡшы бригадир-ойоштороусы итеп танытты. Тотош командалар араһында беренселекте лә Башҡортостан ауыл хужалығының йәш белгестәре яуланы.

Киләһе йыл слет икенсе урынға сыҡҡан команда ерендә – Кострома өлкәһендә үтәсәк.

## Парижды ла алдыҡ беҙ…



Өфөнөң Әҙһәм Исҡужин исемендәге 9-сы музыка мәктәбе уҡыусылары Никита Аксенов һәм Алексей Погудин Францияла үткән “Роза ветров” халыҡ-ара музыка фестивалендә ҡатнашып, Европа ҡалаларында сығыштар яһап йөрөп ҡайтты. Баянсылар дуэты бындай сығыштарға Рәсәй конкурстарында еңгәндән һуң лайыҡ булды. Бик күп илдәрҙән һәләтле музыканттарҙы йыйған был сараны шуға ойоштороусылары конкурс итеп түгел, ә фестиваль рәүешендә үткәрергә ҡарар иткән, сөнки унда эләккән һәр бала – үҙе үк еңеүсе һәм талант эйәһе.

**ҺҮРӘТТӘ: Никита Аксенов һәм Алексей Погудин етәкселәре Зөһрә Теләпова менән.**

Тиҫтерҙәрең ижады

## Әсәйем

Тәмле аштарын
Бешерә әсәйем.
Ауырып киттем,
Бына сәсәйем.

Шунда уҡ әсәй
Эсерҙе дарыу.
Күрҙем әсәйҙең
Йөҙөндә арыу.

Мине дауалап
Арыған әсәйем.
Шәбәйеү кәрәк –
Уны йәлләйем.

**Гөлнәзирә ИСХАҠОВА.**
**Ейәнсура районының**
**Самаҙы ауылы.**

## Сәскәләр

Сәскәләр бит бик күп төрлө,
Күҙҙең яуын алырлыҡ.
Бөтәһе лә бик матурҙар,
Хатта хайран ҡалырлыҡ.

Ә мин изге кешеләрҙе
Сәскәләргә тиңләйем.
Улар кеүек матурҙарға
Тик уңыштар теләйем.

Тыуған ерем матур булһын,
Үҫтерәйек беҙ гөлдәр.
Матурлыҡ эсендә йәшәп,
Күтәрелһен күңелдәр!

**Айгөл МӨХӘМӘТНУРОВА.**
**Асҡын районының**
**Ҡарткиҫәк ауылы.**

## Ҡайындар

Йәй буйына аҡ ҡайындар
Шаулап тора урманда.
Төрлө-төрлө ҡоштар һайрай
Улар ботаҡтарында.

Ҡайын тирәләй балалар
Өйөрөлөп тә алалар.
Ә көҙ еткәс япраҡтарын
Ергә ҡоя һалалар.

Ҡышын ҡайын ботаҡтарын
Ап-аҡ ҡар ҡаплап ала.
Яҙ еткәнсе, матур ҡайын
Татлы йоҡоға тала.

**Лилиә ҠАҺАРМАНОВА.**
**Бөрйән районының**
**Байназар ауылы.**

## Һабантуй

Гөрләп тора ҙур ялан,
Һабантуй бара бында.
Барыһы ла: йәше, ҡарты
Ял итәләр байрамда.

Кемдер бәйгелә сабыша,
Ә кемдәрҙер – көрәшә.
Мәргәнлектә, тапҡырлыҡта
Бары ла көс һынаша.

Шау ҙа гөр килеп тора
Сәскәле матур ялан.
Һабантуйҙың ҡыҙған мәле,
Йәмле тәҫ алған байрам.

**Вилнара ҒӘЛИӘКБӘРОВА.**
**Балаҡатай районының**
**Түбәнге Үтәш ауылы.**

## Өләсәйгә теләк

Өләсәйҙең серле йылмайыуы,
Наҙлы һүҙе беҙҙе йылыта.
Өләсәйем аңлай, ғәфү итә,
Әкиәттәр һөйләп йоҡлата.

Яратам мин һине, өләсәйем.
Ҡайғырма һин, йәшә шатлыҡта.
Сәләмәтлек, аҡ бәхеттәр генә
Юлдаш булһын һиңә һәр саҡта!

**Гөлфинә ХӘЛИТОВА.**
**Баймаҡ районының**
**Ҡаратал ауылы.**

## Тыуған ауылым

Ауылыма килер булһаң,
Минең ауыл – Яңыбай.
Барыһына таң ҡалырһың,
Бөтәһенә ул бик бай.

Ҡороюлдың буйҙарында
Балалар сыр-сыу килә.
Ә инде болондарында
Ҡолондары йүгерә.

Ауылымды һәр яғынан
Уратып алған тауҙар.
Ул тауҙарҙан үҙәндәргә
Сылтырап аға һыуҙар.

Яңыбайым тула минең
Эшсән кешеләр менән.
Бик яратам, ауылкайым,
Айырыла алмам һинән!

**Гөлдәниә ХӨСӘЙЕНОВА.**
**Ейәнсура районының**
**Яңыбай ауылы.**



# Эт менән бесәй тарихы

## (Хикмәтле хикәйә)

Элегерәк эт менән бесәй бик татыу йәшәгән, ти, ҡайғыһын да, шатлығын да бергә кисергәндәр, имеш. Аҙыҡ табырға бергә йөрөгәндәр, һуңынан табыштарын икәүләп эшкәртеп, тамаҡ туйҙырғандар, ти. Йылдар үтә килә, бесәйҙең хәйләкәрлеге, юхалығы өҫтөнлөк ала барған, бик сығып йөрөргә лә теләмәй, көндөҙ шул тиклем йоҡоһо килә, йылы мейес башы һис тә иҫенән сыҡмай икән. Сираттағы һунарҙан ҡайтып, киске табын ҡороп ултырғас, бесәйебеҙ иркә генә мыраулап, уратып һүҙ башлаған:

– Дуҫҡай, былай итеп икәүләшеп көнөҙөн ҡырҙа йөрөп, һалҡын өйгә ҡайтып ингәнсе, әллә мин ашарға бешереп, усаҡта ут һүндермәй, һине көтөп өйҙә генә ҡалайыммы икән? Йортобоҙ ҙа таҙа, йылы булыр. Һин, дуҫҡайым, йылғырыраҡ та, көслөрәк тә, етмәһә, шәп тә йүгерәһең. Яңғыҙың йүнләп алып ҡайтканың да етер әле, – тигән, матур йәшел күҙҙәрен көлдөрөп. Тыуғанда уҡ тоғролоғо маңлайына яҙылған эт күп уйлап тормаған:

– Эйе шул, дуҫым, былай йәшәүе ысынлап та күңеллерәк булыр. Һинең ҡайтыуыңды берәү һағынып көтөп торһа, ашарға табыуы ла еңелерәк булыр төҫлө, – тип яңыса тормош көтөүгә ризалығын биргән.

Бер аҙ йәшәй биргәс, бесәйҙең дә мутлығы асыла башлай: ашарға бешерһә лә, эт ҡайтыуға һөйәк-һаяҡ ҡына ҡала, ҡайһы саҡ үҙе сысҡан менән һыйланып туя ла, эштән ҡайтыусының тамағына йүнләп әҙерләмәй икән...

Ваҡыт үтә килә эттең дә түҙемлеге бөткән: бер көн килеп өйҙәшенә бар үпкәһен асып һалған да, башын ғорур тотоп, яңы ғына һунарҙа дуҫлашып алған аусы йортона күсеп сығып киткән. Бесәй ҙә, яңғыҙ йәшәү ауырлығын татый башлау менән, бөтөн оҫталығын эшкә егеп һунарсы өйөнә барып ингән:

– Үҙеңә лә хеҙмәт итермен, мин барҙа бер бөртөк сысҡан һеҙҙе борсорға баҙнат итмәҫ, эт дуҫымды ла ситтән генә булһа ла күреп йөрөрмөн, зинһар һыйындырып йәшәтегеҙ инде, – тип өй хужаһына һырпаланып иркәләнгән. Берике тамсы йәшен дә сығарып күрһәткәс, был өйҙә уға ла урын табылған, ти.

Тоғро эт иһә, мин бесәй менән һис тә бер ҡыйыҡ аҫтында йәшәйәсәк түгелмен тип, ҡураға сығып урынлашҡан. Һунарсы уға кескәй генә өй яраҡлаштырып биргән, ти.

Бесәй ысынлап та һүҙендә торған: ул булған ергә быға тиклем ялҡытып бөткән кескәй кимереүселәр яҡын да юлламаған.



Эт тә тоғро рәүештә хужаһына хеҙмәт иткән, бер ваҡытта ла сит-яттар тыныс ҡына ихатаға үтеп инә алмаған, һунарҙа ла ҙур ярҙамы тейгән дүрт аяҡлы дуҫтың. Тик хәҙер бер-берећен күреп ҡалһа, боронғо ике әшнәнең ғәләмәт ныҡ һарыуҙары ҡайнап, һырт йөндәре ҡабарып, асыуланышып китәләр икән...

Эттең һөйәккә булған мөхәббәте лә, бәлки, элек бесәй менән үткәргән мәлдәрен онота алмауынандыр. Иғтибар иткәнегеҙ бармы: тыныс ҡына сәләмләшеп торған йәки икәүләшеп бер ояла ултырған эт менән бесәй ҙә осрап ҡуя бит. Ни эшләйһең, матур хистәрҙе һағынып иҫләргә генә ҡала. Йылы хистәр эҙһеҙ үтмәй, бер-беребеҙҙең ҡәҙерен белеп йәшәйек, дуҫтар!

**Әлфинә НӘБИУЛЛИНА.**
**Бөрйән районының**
**Нәби урта мәктәбе.**

УКЫТЫУСЫ ЙЫЛЫ 2010

# Минең кәҙерлеләрем

Атай-әсәйем тырыш, сабыр, эшһөйәр, үҙ эшенә бик яуаплы ҡараған, коллегалары араһында ҙур хөрмәт яулаған кешеләр. Улар үҙ ғүмерен балалар уҡытыуға арнаны. Атайым мәктәп директоры вазифаһын башҡара. 2009 йылда уға Башҡортостан Республикаһының мәғариф отличнигы тигән маҡтаулы исем бирелде.

Өс бала тәрбиәләйҙәр. Өлкән улдары Рәмил Грозный ҡалаһында хеҙмәт итһә, уртансылары, йәғни мин, республика иктисад лицей – интернатында белем алам. Ә иң кесебеҙ Иҙел Алғаҙы мәктәбендә уҡып йөрөй.

Атай-әсәйемде бик яратам, һәр байрам, каникулдарға кәҙерлеләремде, өйөмдө һағынып ҡайтам.

**Айгөл ӘБДЕЛҒӘФӘРОВА,**
**Республика иктисад лицей – интернаты уҡыусыһы.**

# Йөрәк йылыһын өләшә



Уҡытыусы – донъялағы иң изге, иң мәрхәмәтле һөнәрҙәрҙең береһе. Ошо яғымлы, йылы һүҙҙе ишетеү менән, күҙ алдыма яратҡан уҡытыусым, синыф етәксем Кашапова Нәбирә Миңлевәли ҡыҙы килеп баҫа. Ул беҙҙе 4-се синыфтан үҙ ҡанаты аҫтына алды һәм бөгөнгәсә фәндәр тауына әйҙәй. Беҙгә тиклем дә күп сығарылыш уҡыусыларын оло юлға баҫтырған ул.

Уҡытыусым 1957 йылдың 10 февралендә Дәүләкән районының Вперед ҡасабаһында донъяға килә. Мәктәптә тырышып уҡый, бәләкәйҙән спортты үҙ итә. Мәктәпте тамамлағас, физкультура уҡытыусыһы һөнәрен үҙләштереү өсөн, Күмертау педагогия училищеһына юллана. 1977 йылда юллама буйынса Бүздәк районының Ҡаңны-Төркәй ауылына эшкә ебәрелә. Бында ул егерме йылдан ашыу физик тәрбиә биреү дәрестәрен алып бара, балаларҙа спортка һөйөү тәрбиәләй. Ошо ваҡытта Нәбирә Миңлевәли ҡыҙы етәкләгән командалар район кимәлендә үткәрелгән спорт ярыштарында әүҙем ҡатнаша. Волейбол буйынса өс йыл рәттән тәүге урын яулау тураһында ла әйтеп үтергә кәрәк. Был кубоктар әле лә мәктәптең “Спорт ҡаҙаныштары” стендын биҙәй.

1994 йылда уҡытыусым Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтының филология факультетына уҡырға инә. Әле ул беҙҙә урыҫ теле һәм әҙәбиәтенән уҡыта, был фәндең нескәлектәренә төшөндөрә, айырыуса телмәр үҫтереүгә ҙур баҫым яһай.

Нәбирә Миңлевәли ҡыҙының уҡыусылары, район олимпиадаларында ҡатнашып, призлы урын яулай. Мәҫәлән, мин урыҫ теле буйынса 4-се синыфта – III, быйыл II урын яуланым. Киләсәктә лә уның уҡыусылары һынатмаҫ, тип ышанам. Уҡыусыларҙың йыл һайын Рәсәй “Урыҫ айыуы балаһы” конкурсында ҡатнашыуын да маҡтап телгә алмау мөмкин түгел.

Нәбирә Миңлевәли ҡыҙы мәктәптә талапсан уҡытыусы булһа, өйҙә мөләйем ҡатын , уңған хужабикә, балаларын һәм ейән-ейәнсәрҙәрен өҙөлөп һөйгән әсәй – өләсәй. Утыҙ йыл инде тормош иптәше Өлфәт Сөнәғәт улы менән татыу ғүмер итәләр. Өс ҡыҙ үҫтереп, оло юлға баҫтырҙылар. Оло ҡыҙҙары Айгөл дә уҡытыусы. Бөгөнгө көндә баш ҡалабыҙҙағы мәктәптәрҙең береһендә башҡорт телен уҡыта. Уртансы ҡыҙҙары Лилиә китапханасы һөнәрен һайлаған. Төпсөк ҡыҙҙары Әлиә киләсәктә финансист-юрист булырға хыяллана.

Уҡытыусыма яуаплы, ауыр, әммә изгелекле эшендә уңыштар, яңы үрҙәр һәм ижади асыштар теләйем.

**Гөлназ ӘХМӘТОВА,**
**Бүздәк районының Хәким Ғиләжев исемендәге Ҡаңны-Төркәй мәктәбе уҡыусыһы.**
**ҺҮРӘТТӘ: Нәбирә Кашапова дәрес ваҡытында.**



## “Салауат йыйыны”нда ҡатнаштыҡ

Беҙҙең ауылда “Хазина” мәҙәни күңел асыу үҙәгендә “Ләйсән” балалар фольклор түңәрәге эшләй. Унда утыҙға яҡын бала шөғөлләнә. Түңәрәктең етәксеһе Лира Хәйруллина, минең әсәйем, беҙҙе йырларға, бейергә өйрәтә. Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады, йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре менән таныштыра.

Быйыл июнь айының матур бер көнөндә Ишембай районында уҙғарылған “Салауат йыйыны”нда ҡатнаштыҡ.

Унда беҙҙе мәғрур Торатау ҡаршы алды. Халыҡтың тауға артылғанын күреп, был тауҙың, ысынлап та, изге икәненә инандыҡ. “Салауат йыйыны” бик матур үтте. “Батыр егет”, “Сая ҡыҙ” бәйгеләре айырыуса ныҡ оҡшаны.

Сит яҡтарҙан килгән ҡунаҡтар милли кейемдәребеҙҙе күреп, ҡайҙан булыуыбыҙҙы, исемдәребеҙҙе һорашып, беҙҙең менән фотоға ла төштө.

III Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайында ҡатнашыусы вәкилдәрҙең дә килеүе мәртәбә өҫтәне. Беҙ ҙә Башҡортостаныбыҙ тарихындағы бик мөһим ваҡиғанан ситтә тороп ҡалмағанбыҙ икән тип, йыйын гөрләп торған майҙан буйлап ғорур атланыҡ. Төрлө сәнғәт оҫталарының сығыштарын ҡараныҡ. Беҙ ҙә был йыйынға буш барманыҡ. Милли батырыбыҙ Салауат Юлаев һәм Башҡортостаныбыҙ тураһында таҡмаҡтар менән сығыш яһаныҡ.

“Хазина” мәҙәни үҙәге етәксеһе Татлыбаева Сәлимә Нәғим ҡыҙының: “Арыманығыҙмы, балалар?” – тигән һорауына, “Беҙҙең танау-ҡолаҡтарыбыҙҙы ҡырҡмағандар, әсе тимер ҡыҙҙырып ин һалмағандар, тотҡонға алып бикләп ҡуймағандар. Батырҙарыбыҙ халҡы өсөн ғүмерҙәрен йәлләмәгән, ә беҙҙең улар иҫтәлеге өсөн бер көнөбөҙҙө йәлләргә хаҡыбыҙ юҡ!” – тип яуап бирҙек.

**Айһылыу ХӘЙРУЛЛИНА.**
**Белорет районының Шығай ауылы.**
**ҺҮРӘТТӘ: “Ләйсән” балалар фольклор түңәрәге ағзалары.**

## Өләсәйем

Мин Белорет районында тыуып үҫтем. Әбйәлил районының Хәмит мәктәбенә килдем, шунда уҡып йөрөйөм. Хәмиттәге өләсәйем Баҙыян Рамаҙан ҡыҙы ғүмер буйына мәктәптә эшләгән, хәҙер хаҡлы ялда. Ул миңә белмәгәнде өйрәтә. Китап, дәфтәрҙе һаҡлап тоторға ҡуша, бәләкәйҙәрҙе рәнйетмәҫкә, ололарға ярҙам итергә һәм ихтирам итергә кәрәк,ти. Өләсәйем икенсе уҡытыусым кеүек һәм ул минең яҡлаусым да.

Бирҙеғолдағы Хәйерниса өләсәйем дә оҙаҡ йылдар уҡытыусы булып эшләгән. Ул да мине тик яҡшы нәмәләргә өйрәтә, дини китаптан доғалар уҡып, сүрәләр ятлата.

Өләсәйҙәремдең икеһенә лә рәхмәтем сикһеҙ һәм ҙур. Иҫән-һау булһындар, ҡайғы - хәсрәт күрмәй, оҙаҡ йәшәүҙәрен теләйем.

**Илһам ҒӘЛИАСТАНОВ,**
**Әбйәлил районының**
**Хәмит мәктәбе уҡыусыһы.**

## “Аманат” ваҡыты менән йәшәгеҙ!

Хөрмәтле уҡыусылар! Май-июль һандарында түбәндәге сәғәттең ошондай уҡ сирек өлөшсәләрен баҫып сығарғайныҡ. Артабан һеҙҙең бурыс – ошо һандарҙан ҡырҡып алып, ошондай сирек өлөшсәләрҙән "Аманат"тың сувенир сәғәте һүрәтен йыйып, бергә йәбештереп, беҙгә ебәреү. Артына, әлбиттә, үҙегеҙ тураһында мәғлүмәттәрҙе тултыраһығыҙ.

Беҙҙең бурыс – редакцияға килгән һүрәттәр араһында лотерея үткәреп, һүрәттәге сәғәттең ысынын еңеүсегә тантаналы тапшырыу.

Уйындың йомғағы сентябрҙә иғлан ителәсәк.

**Әйткәндәй, 1 сентәбрҙән “Аманат” журналына 2011 йылдың беренсе ярты йылына яҙылыу башлана.**



# Сыныҡтырыу лагеры

Мәғлүм булыуынса, республикала балаларҙың йәйге ялын ойоштороуға ҙур иғтибар бирелә. Иң һөйөндөргәне, ауыр холоҡло үсмер һаналып, бәлиғ булмағандар эше буйынса бүлектә иҫәптә тороусылар өсөн дә йыл һайын махсус лагерҙар ойошторола. Быйыл “Йәш спецназсы” лагеры республика райондарында 43 сменала эшләне. Иң беренсе булып лагерь Ҡандракүл биләмәһендә асылды. Уны ойоштороуҙа Рәсәй наркотик матдәләр әйләнешен контролләү буйынса федераль хеҙмәтенең БР буйынса идаралығы вәкилдәре һәм башҡа ойошмалар ҡатнашты. Иллеләгән үсмер, йәш һалдат курсын үтеп, ҡул һуғышы буйынса күнекмәләр алды, ялан шарттарында хәрби хәрәкәт нигеҙҙәренә төшөндө, атырға, ҡаршылыҡ һыҙаттары аша сыға белергә өйрәнде. Шулай итеп, лагерҙың маҡсаты үсеп килеүсе йәш быуынды хәрби хеҙмәткә әҙерләү генә түгел, ә наркотик, психотроп матдәләрҙе ҡулланыуға ҡаршы тәрбиә дәрестәрен дә биреү булды.

Әлшәй районының Чехов ауылы ситендә, бик йәмле быуа янында урынлашҡан “Йәш спецназсы” лагерының программаһы бер аҙ икенсерәк булһа ла, маҡсат шул уҡ: үсмерҙәргә насар ғәҙәттәренән арынырға, дөрөҫ юлға баҫтырырға ярҙам итеү, физик яҡтан сыныҡтырыу. Әсе июль айының бер көнөндә ошо лагерға сәйәхәт ҡылдыҡ. Ялан шарттарында ял итеүсе балаларҙы оҙаҡ эҙләргә тура килмәне. Төрлө төҫтәге теҙелеп киткән палаткалар әллә ҡайҙан күҙгә салынды. Лагерь начальнигы Рөстәм Шәрипов та, вожатыйҙар Надежда Лоҡманова менән



Әлиә Хөснөтдинова ла, балалар ҙа ихлас ҡаршыланы беҙҙе. “Балалар ҡайҙа ла балалар инде. Тик урманда үҫкән ағастар ҙа бер төрлө генә булмағандай, уларҙың да яҙмыштары төрлөсә шул” тип уйланым. Ә бит, уйлап ҡараһаҡ, барыһына ла тик эскелек ғәйепле. Әгәр ата-әсәләре эсеп, теләһә ҡайҙа ҡунып йөрөмәһә,



балаларының да өҫ-башы ҡараулы, тамағы туҡ булыр, мәктәптә лә башҡалар ыңғайына тырышып уҡырҙар ине. Спиртлы эсемлектәрҙе, тәмәкене лә кесе йәштән ауыҙға алмаҫтар, кеше талап, әйбер урлап та йөрөмәҫтәр ине... Их, берәй ваҡыт өлкәндәр, аҡылға килеп, сабыйҙарының бала сағын урлауҙан туҡтарҙармы икән? Хәйер, һөйләйәсәк һүҙебеҙ бөтөнләй икенсе юҫыҡта – ауыр холоҡло балаларҙың нисек ял итеүе тураһында бит әле.

– Бөтәһе 35 бала ял итте. Улар араһында ауыр холоҡло үсмерҙәр генә түгел, ә Раевка балалар приютында тәрбиәләнеүселәр һәм спортсылар ҙа булды. Төрлө йәштә булып, ҡыҙыҡһыныу, шөғөлдәре буйынса бер-береһенән айырылһалар ҙа, үҙ-ара уртаҡ тел тиҙ таптылар, смена тамамланғансы гел бергә йөрөнөләр, бөтә сараларҙа ихлас ҡатнаштылар, өлкәнерәктәр үҙҙәренән кесерәктәрҙе ҡарап, ҡурсалап ҡына йөрөттө, - тине Рөстәм Урал улы.

Ялан шарттарындағы лагерҙың нисегерәк булыуын күҙ алдына килтерәһегеҙҙер инде. Тәүлек буйына тик тышта, тәбиғәт ҡосағында йәшәйһең, ҡоштар моңон тыңлап йоҡоға талаһың, уянаһың. Ҡулйыуғыстарҙы ла үсмерҙәр үҙҙәре эшләгән: пластик шешәләрҙе ағасҡа беркетеп ҡуйғандар. Полиэтилен менән көпләп йәйге мунса ҡороуға ла баштары еткән. Сабыныу өсөн миндек тә эҙләп әллә ҡайҙа йөрөйһө түгел, әрәмәлек эргәлә генә.



Үҫмерҙәргә айырыуса Рөстәм Шәрипов үткәргән тын алыу гимнастикаһы, кикбоксинг буйынса күнекмәләр оҡшаған. Смена ваҡытында Чехов исемендәге балалар шифаханаһында ял итеүселәр менән осрашып ике тапҡыр футбол уйнағандар. Ғөмүмән, балаларҙың ҡайһыһы менән һөйләшһәң дә, лагерҙағы мөхит, уҙғарылған төрлө сараларҙан кәнәғәт ҡалғаны һиҙелде. “Рөстәм Урал улы – иң шәп тренер! Надежда Валерьевна – супер вожатый!” – тип ихлас яуапланы улар. Туҡланыуға ла һүҙ тейҙерерлек булмаған, үрҙә телгә алынған данлыҡлы Чехов исемендәге балалар шифаханаһы көнөнә өс тапҡыр тәмле аш менән тәьмин иткән.



Ҡайһы берәүҙәр ялан шарттарындағы ошондай лагерҙа беренсе йыл ғына түгел. Мәҫәлән, Алина **(исеме үҙгәртелде)** тигән ҡыҙ, быйыл өсөнсөгә килдем, ти. Тәртибе арҡаһында бәлиғ булмағандар эше буйынса районда иҫәптә торһа ла, уның хаҡында: “Илгәҙәк, алсаҡ ҡыҙыҡай, әйткәнде тыңлай, лагерҙа үткәрелгән бөтә сараларҙа ла ихлас ҡатнашты”, – тине вожатыйҙар. Әйткәндәй, ауыр үҫмер һаналған күптәрҙә ошондай лагерҙа ял иткәндән һуң ыңғай яҡҡа үҙгәреш күҙәтелә. Беҙ һөйләшкән үҫмерҙәр араһында ла бында килгәс тәмәке тартыуын ташлаусылар бар ине. Күрәһең, физик күнегеүҙәр, буш ваҡытты файҙалы итеп үткәреүҙе ойоштороу, иң мөһиме, аңларға тырышыу һәм тиң итеп ҡарау бәғзеләргә насар ғәҙәттәренән арынырға ярҙам итәлер. Мәҫәлән, Рәил **(исемен үҙгәрттек)** ошондай лагерҙа беренсе тапҡыр ғына ял итмәй. Ипле, тыйнаҡ күренә. Әммә ҡасандыр һуғышыуҙа ҡатнашыуы арҡаһында бәлиғ булмағандар эше буйынса бүлектә иҫәпкә ҡуйылған. Уның хаҡында ла тәртибе йылдан-йыл яҡшы яҡҡа үҙгәрә тинеләр, һөйөнөп. Бына бит, тырышһаң, үҙ өҫтөңдә эшләһәң, тайғаҡ юлға баҫа башлаған ерҙән тура атлай башларға ла мөмкин. “Йәш спецназсы” лагерында ауыр холоҡло үҫмерҙәр менән бер рәттән, кикбоксинг буйынса республика һәм Рәсәй кимәлендә призлы урын яулаған спортсылар ҙа ял итте. Раевкалағы 3-сө гимназия уҡыусылары Айгиз Шәймөхәмәтов менән Радмир Нухов та лагерҙан бик кәнәғәт. Кикбоксинг менән алты йәштән шөғөлләнәләр. “Рәхәтләнеп ял иттек, туйғансы һыу индек, футбол уйнаныҡ, тренерыбыҙ Рөстәм Шәрипов етәкселегендә кикбоксинг буйынса күнекмәләр уҙғарҙыҡ”, – тине егеттәр. Смена буйына уҙғарылған төрлө ҡыҙыҡлы ярыштар, конкурстар, Нептун, үҙидаралыҡ, ғашиҡтар, Робинзон көнө күңелдәрендә матур хәтирәләр ҡалдырған. Кистәрен усаҡ янында йыйылып ултырып, хуш еҫле үләндәр ҡушып бешерелгән тәмле сәй эсеүҙәр, педагог-ойоштороусы Надежда Лоҡманованың гитарала уйнап йырлауы – береһен дә онотторлоҡ түгел.

**Нурия ӘХТӘМОВА.**

**ҺҮРӘТТӘРҘӘ: спортсылар Радмир Нухов менән Айгиз Шәймөхәмәтов; һулыш**

# ҮТКӘНДЕ БЕЛЕП, КИЛӘСӘККӘ ҠАРАП

Шәжәрә ғәрәп теленән тәржемә иткәндә ағас тигән һүҙ. Борон замандан беҙҙең ата-олатайҙарыбыҙ ырыу-ҡәбиләне, нәҫел-нәсәпте, ата-бабаларыбыҙҙың исемдәрен ағас рәүешендә тармаҡландырып яҙа барған. Ағас боронғо башҡорттарҙа һауаны, ерҙе, ер аҫтын берләштереүсе билдә булған. Шул уҡ ваҡытта халыҡтың тормошон да сағылдырған. Тамыры – үткәнебеҙ, олоно – бөгөнөбөҙ, тармаҡ-ботаҡтары – киләсәгебеҙ тигәндәр. Шуға ла һәр башҡорт үҙ тарихын белергә, киләсәген ҡайғыртырға тейеш.

Беҙҙең Йәһүҙиндәр әҡрәбәһенең шәжәрә байрамы беренсе тапҡыр 1992 йылда ойошторолдо. Унан һуң туғандар 1994, 2001 һәм 2007 йылда шәжәрә байрамдарында осраштылар. Был осрашыуҙарҙың төп сәбәпсеһе – беҙҙең өлкән олатайыбыҙ, күренекле шәхес, заманына күрә бик уҡымышлы, зиһенле, әүлиәлек һәләттәренә эйә булған, Тамьян-Ҡатай кантонының Тамьян-Түңгәүер волосына ҡараған Үтәгән ауылы мәсетенең имам-хатибы, указлы мулла Ғәбделкәбир Йәһүҙин. Уның ете ул-ҡыҙынан таралған 43 ейән-ейәнсәре, 113 бүләбүләсәре, 30-лап тыуа-тыуасаһы Ғәбделкәбир олатайҙың иҫтәлегенә арнап ҡор йыя, түңәрәк даталарын билдәләп бара. Вариҫтарының һәр ҡайһыһы үҙенең 16-17 быуынын яҡшы белә, сөнки уҡымышлы мулла олатайыбыҙ 19 ғына йәшендә үҙенең шәжәрәһен өйрәнә башлай һәм уны ғәрәп телендә төҙөп ҡалдырған.



Бөгөн 81 йәше менән барған, атаһы кеүек үк дин юлынан киткән улы Ҡасим Йәһүҙин, Үтәгән мәсетенең мәзине, был шәжәрәне хәҙерге хәрефтәр менән күсереп, тулыландырып, яңынан эшләне. Һөҙөмтәлә Йәһүҙиндарҙың ғына түгел, ә бөтә Үтәгән ауылында элек-электән йәшәгән бубылдар араһының шәжәрәһе тергеҙелде.

Шәжәрә байрамына райондың төрлө ауылдарында йәшәгән, республикабыҙға, сит өлкәләргә, илебеҙҙең төрлө мөйөштәренә һибелгән туғандарыбыҙ саҡырылды. Осрашыуға улар балалары, ейән-ейәнсәрҙәре менән килде. Байрам ваҡытында юғары кимәлдә концерт ойошторолдо. Осрашыу барышында Йәһүҙиндар араһының иң булдыҡлы, уңған, тормош көтөргә ынтылып торған кешеләре, иң йәш сабыйҙары, аҡһаҡалдары, ағинәйҙәре, өмөтлө йәштәре, өлгөлө хужа-хужабикәләре, егәрле еңгәйҙәре, сос кейәүҙәре билдәләнде. Шулай уҡ йәш килендәр һәм кейәүҙәр ҙә өлөшһөҙ ҡалманы.

Был шәжәрә байрамы барыһына ла өлгө булып тора. Сөнки шәжәрәһен, тарихын, ата-бабаларының тормошон, көнкүрешен күреп, өйрәнеп үҫкән балаларҙың киләсәге ныҡ, яҡты. Улар, үткәнен белгәс, киләсәген ҡайғырта, ата-бабаларының юлын, шәжәрәһен дауам итә.

**Гөлниса ЙӘҺҮҘИНА.**
**Әбйәлил районының**
**Үтәгән ауылы.**

РЕСПУБЛИКА ЙЫЛЫ 1990 2010 ГОД РЕСПУБЛИКИ

ТӨЙӘГЕМ ТАРИХЫ

# Кинйәбулат – Ҡарағайтуғай

Кинйәбулат ауылының тарихы бик ҡыҙыҡлы. Тәүҙә ул Ҡарағайтуғай утары тип атала. Архив документтары буйынса, Ҡарағайтуғай, утар булып, 1776 йылда Урмансы ауылынан (хәҙерге Ейәнсура районының Ибрай ауылы) айырылып сыға. Тәүҙә утарҙа 4-5 хужалыҡ туплана. Халыҡ Оло Һүрәм буйына, Йылантауҙың иң көньяҡ моронона төпләнә. Бер аҙ йәшәгәс, үргәрәк, хәҙерге урынына күсеп ултыра, сөнки түбәндә яҙҙарын һыу баҫыу осраҡтары булғылай.

Урмансы ауылынан яңы урынға күсеүҙе Йомағәли Мырҙағәлиев башлап ебәрә. Ул һәр телгән кеше менән торорға теләмәй, шуға ла яңы урынға туғандары, яҡын дуҫтары менән күсә.

1780-1860 йылдарҙа йәшәгән йөҙбашы Кинйәбулат Ҡаҙбулат улы Йомаҡаев хөрмәтенә 1857 йылда ауыл халҡы Ҡарағайтуғай утарына Кинйәбулат ауылы тигән исем бирергә ҡарар итә. Ошо мәсьәлә буйынса ауыл аҡһаҡалдары Башҡорт ғәскәре башлығына мөрәжәғәт итә, ә ул губернаторға хат яҙа. Ауылға Кинйәбулат исемен биргәндә ихтирамлы Кинйәбулат ҡартҡа 77 йәш була. Ул 1860 йылда, 80 йәше тулғас вафат булған. Ете улы булғанлығы билдәле. Кинйәбулатовтар – ауылда төп фамилия. Шулай уҡ Мәликовтар күп, ул Кинйәбулат ҡарттың өлкән улы Әбделмәлик исеменән алынған. Баһауетдиновтар Кинйәбулат ҡарттың өсөнсө улы Баһауетдиндан киткән.

Ауылымдың киләсәге өмөтлө. Әлеге көндә 170 кеше йәшәй. Ҡалала күп йылдар йәшәгәндән һуң ҡайтып өй һалыусылар ҙа бар.

**Гөлзифа КИНЙӘБУЛАТОВА.**
**Ейәнсура районының**
**Кинйәбулат ауылы.**

# Үтәғол һәм Бирҙеғол

Мин йәшәгән ауыл Үтәғол тип атала. Ул 1796 йылда барлыҡҡа килгән. Исемен ошонда килеп беренсе бура күтәргән Үтәғол исемле бабайға арнап ҡушҡандар. Үтәғол ауылын икегә бүлеп Ҡаҫмарт йылғаһы аға. Уның бер яғын Үтәғол, ә икенсе яғын Ҡыуат тип йөрөтәләр. Сөнки унан алда был урында Ҡыуат ауылы булған. Оло юл аша ҙур Бирҙеғол тауы тора. Уның яртыһы ҡылған менән ҡапланған, ә яртыһы – ҡайынлыҡ. Тауҙың үҙ легендаһы ла бар.

Бар халыҡ йәйләүҙә булған. Ауылда Үтәғол бабай ҡыҙы Алтынбикә менән генә ҡалған. Үтәғол ҡыҙына киндер япрағы алып килергә ҡушҡан. Шунда уны ҡаҙаҡтар тотоп алып киткән.

Ситтә уның улы тыуған. Ҡаҙаҡтар, Хоҙайға рәхмәт әйтеп, бирҙе ҡол, бирҙе ҡол, Алла ҡоло тип ҡыуанышҡандар. Үҫеп еткәс, ҡаҙаҡтар йоҡлаған ваҡытта, Бирҙеғол әсәһе менән уның тыуған яғына ҡасып киткән. Ҡайтып еткәс, ул ошо тау башына менгән. Шул көндән алып тауҙы Бирҙеғол тип атағандар.

**Ынйыгөл ИШБУЛАТОВА.**
**Ейәнсура районының Үтәғол ауылы.**

**ҺҮРӘТТӘ:** Үтәғол ауылы Бирҙеғол тауынан ошолай күренә.



# “Эт” һүҙе лә тәрбиә

## Эт ҡойроғо

Төштән һуң әсәһе унынсы синыфта уҡыған өлкән улы Рәмзилгә:

– Бөгөн йома. Утын бөткән. Эре киҫкәләрҙе ваҡлап, әҙерләп ҡуй. Мунса яғырбыҙ. Туғандарың һыу ташыр, – тип, бөтә балаларына ла эш тәғәйенләп, киске һауынға фермаға китте.

Рәмзил, үҙенә ҡушылған эште ике йәшкә кесерәк туғаны Рәсимгә ауҙарып, саңғы секцияһына юлланды. Рәсим дә балтаға тотонорға ашыҡманы. Утынды алтынсы синыфта уҡыған Румил иңенә йөкмәтеп, сәкән шөғөлөнә һыпыртты.

Эштән табан ялтыратырға Румилгә



лә сәбәп табылды: математиканан факультатив икән. Утын әҙерләү төпсөк малай Рәмил өлөшөнә төшкән көмөш булып килеп терәлде. Төпсөктөң эре-эре ярҡаларға ла, сукмар шикелле ауыр оҙон һаплы утын ярғыс балтаға ла көсө етмәне. Ул көндө мунса яғылманы.

“ Эт – эткә, эт – ҡойроҡҡа ” тигәндәре шулдыр инде,” – тип ҡуйҙы өләсәй, йөн иләп ултырған оҙон орсоғоноң осо менән мунса көнө етеүҙән ҡысыта башлаған яурынбашын тырнаштырып.

## Эт һуғарыу

Күҙ мәлендә Мараттың ағаһы Хисмәттең, сәкән таяғын ҡапҡа янында ҡалдырып, ағастан эшләп алған конькиҙарын өй алдында ятҡан бүрәнә өҫтөндә сисеп ултырғанын күреп ҡалып, өләсәһе:



– Боҙ ҡалынайһа, эт һуғарып йөрөп, өйгә ҡайтып инмәйһең. Ишек алды йүнләп күрәлмәгән, һабаҡҡа әҙерләнмәгәнһең, – тип һуҡранып үтте һарайға сыҡҡанында.

Марат мал һуғарыу, оҙон торбалар аша баҫыуҙарҙы һуғарыу кеүек һөйләмдәрҙә “Һуғарыу” һүҙенең мәғәнәһе һыу эсереү икәнен яҡшы белһә лә, ололарҙан элегерәк ишеткеләгән “эт һуғарыу”ҙың айышын аңлап етмәй ине. Ни бары 8 йәш шул әле уға. Етмәһә, берәүҙең дә этен, йылғаға алып барып, һыу эсереп йөрөгәнен күргәне лә булманы. Әле өләсәйҙең Хисмәт ағаһына һуҡранып үтеүенән “эт һуғарыу” – ваҡытты әрәмгә үткәреү була икәнен яҡшы төшөндө Марат.

## Өрә белмәгән эт

Дүртенсе синыфта уҡыған Басир өләсәһе менән генә йәшәй. Беренсе апрелдең шаярыу ҡатыш алдашыу, Көлкө көнө икәнен дә белерлек йәштә. Мәктәптән ҡайтып килгәндә магазин тирәһендә уранғылап йөрөп ятҡан таныш булмаған бер иҫерек ағайҙы күреп ҡалып, уның менән алдашып шаярып алғыһы килде лә:

– Һаумы, ағай. Өләсәйем һине ҡунаҡҡа саҡырҙы, – тип көләп кенә үтеп китмәк булды.

– Ә- ә. Шулаймы ни? Вәт рәхмәт яуғыры. Тукта әле, тукта. Ҡайһы тирәлә йәшәйһегеҙ? – тигәнгә лә иғтибар итмәй, юлын дауам итте Басир.



Ағай ҙа, иҫерек булһа ла, аптырап ҡалмай, малайҙан күҙ яҙҙырмай эйәреп бара. Өйгә еткәс, рөхсәт тә һорап тормай, Басир асҡан ишектән, соланда алаптай итектәрен сисеүҙе уйламай, яңы ғына йыуылған иҙәндә тайыш – тойош эҙҙәр ҡалдырып, өләсәй ял итергә ятып торған төпкө бүлмәгә:

Ай эсәбеҙ, эсәбеҙ

Ҡайҙа беҙҙең шешәбеҙ... – тип гөрөлдәп торған тауышы менән йырлап килеп инде лә, көйө ыңғайына тыпырлатып бер-ике баҫып та алды.

Тауышҡа серемендән һиҫкәнеп уянып киткән өләсәй, ырғып тороп ултырып, аптырап ҡалды ла:

– Уй, Алла, кем булаһың һуң һин, йәлсемәгер? Билгә көс төшөрөп, бөксәңләп йөрөп атҡарған эшемде юҡҡа сығарғанһың, – тип ят кешегә үкталды.

– Ҡунаҡты шулай ҡаршылайҙармы ни? Бынау улым аша саҡырғанһың бит. “Саҡырған ергә кил” тигәнде лә ишеткәнең барҙыр. Оло кеше бит һин. Бына ошо улым эйәртеп алып ҡайтты, рәхмәт төшкөрө, - тип теҙҙе ни эшләргә лә белмәй аптыранып торған малайға әйләнеп ҡарап.

– Шаярткайным ғына. Бөгөн беренсе апрель бит, – тип аҡланды Басир.

Өләсәй иҫеректе, ләғнәттәр яуҙырып, этеп–төртөп сығарып ебәрҙе лә, ҡулына сепрәк алып:

– Өрә белмәгән эт йортҡа бүре килтерә шул ул, – тип һуҡранып, бысраҡ эҙҙәрҙе һөртә башланы.

Башҡаса өрә белмәгән эт булмаҫҡа һүҙһеҙ генә ант итте Басир.

## Эт менән эт булма

Икенсе синыф уҡыусыһы Гүзәлиә бәләкәй ҡапҡанан ихатаға инеп килгәндә, аласыҡ янындағы элеп ҡуйып һауыт-һаба киптерергә ултыртылған күп тарбаҡлы йыуан имән бағанаға супайлы сыбар тауыҡ, сар ҙа сор тауышланып, килеп бәрелде. Уның тауышына ҙур тараҡ кеүек кикрекле, ҡарағусҡыл ҡыҙыл муйыны ҡояш нурҙарында уҡалай йылҡылдап торған әтәс, бөтөн урамға ишетерлек итеп шар ҙа шор ғауғалап, лапаҫ башынан осоп килеп төштө лә, ҡурҡыуҙан да, ауыртыныуҙан да шаңҡып, йөндәрен ҡойоп торған супайлы ла, салбарлы ла тауыҡ тирәләй, һыңар ҡанатын төшөрә биреп, әйләнгеләп алды – “хәл белеште”, йәнәһе. Ситән ҡаҙыҡтарына



ике ҡуллап саҡ-саҡ тотоноп торған ғәҙәттәгесә лыҡа иҫерек Алкашов ағай:

– Т-т-т-ауыҡ аҫ-аҫ-ырағас, а-ашатырға ла кәрәк. Ан-на-һатҡа һалышып ал-дылар, хә-хәрәмдәр, – тигәнгә әллә ниндәй яман һүҙҙәр ҙә ҡушып әйтеп торҙо ла, ҡушарлашып торған әтәс менән тауыҡ яғына утын ағасы елләне. Әтәстең нәфрәте тағы ла көслөрәк яңғыраны. Уға ояһынан сыҡҡан Аҡбай лауылдауы ҡушылды. Тауышҡа һарайҙан бер ҡулына шыйығыраҡ балсыҡ йомғағы тотоп әсәй килеп сыҡты ла:

– Һинең башың ауыртканға тауыктың ни ғәйебе бар, алкаш, – тип балсығын ситән яғына елләне. Шыйыҡ иҙелмә, иҫеректең бөтә йөҙөнә сәсрәп, һыңар күҙенә һыланды. Иҫерек ағай, йөҙөндәге балсыкты һыпыра-һыпыра, ажғырып ситән аша һикереп төшмәк булғайны ла, ҡаҙыҡ осо һынып, тәкмәсләп барып төштө.

Әсәй ҙә, янында ғына торған көйәнтә менән яҫҡынып, ситәнгә яҡынлашҡайны ла, тауышҡа аласыҡтан хафаланып килеп сыҡҡан өләсәй:

– Эт менән эт булма, балам. Бысранма. Хоҙай күреп тора. Яҙаһын да үҙе бирер, – тип әсәйҙең көйәнтәле ҡулына барып йәбеште.

– Өләсәй, ул эт түгел бит. Иҫерек ағай ғына, – тине Гүзәлиә, аптырап.

– Эттән дә этерәк кешеләр ҙә була шул, – тип аңлатты өләсәй ейәнсәренә.



## Эт тормошо

Вәсилә менән Рәсилә әхирәттәр. Дуҫлыҡтары балалар бақсаһынан уҡ килә. Уҡый башлағас та мәктәпкә етәкләшеп кенә бергә барҙылар, бергә ҡайттылар. Синыф бүлмәһендә лә өҫтәл артында бергә ултыралар. Икеһенең дә йөҙҙәре балаларҙыҡыса көләс, буй-һындары ла үлсәп үҫтергән кеүек тип-тигеҙ. Беренселә икеһе лә тик яҡшыға ғына уҡынылар.

Икенселә Рәсилә әхирәтенән ҡалыша башланы ла, бик яҡшы билдәләренә тамамлай алманы уҡыу йылын. Ә өсөнсө синыфтың беренсе яртыһында көс-хәл менән генә өлгәшеүселәр иҫәбендә ҡалды.

Ҡышҡы каникулдан һуң уҡытыусы Гөльямал апай Вәсиләгә:

– Әхирәтең бөтөнләй насар уҡый башланы бит. Өйгә бирелгән эштәрҙе әҙерләүҙә ярҙамлашыр инең, – тине.

Бер көндө, дәрестәрен яҡшылап әҙерләп бөткәс, Вәсилә Рәсилә әхирәтенә барып өйгә эш әҙерләүҙә ярҙамлашырға булды. Әхирәтенең атай-әсәйҙәре, эскелеккә һабышып, фатир хаҡын да түләй алмағас, бөтә уңайлыҡтары булған торлаҡтарынан бәләкәй генә бер өйгә сығарылғандар ине. Шул “яңы фатирға” барып ингәндә алам-һалам ғына түшәлгән ҡаҡ урындыҡтың бер мөйөшөндә атай, икенсеһендә әсәй, иҫкереп-тетелеп бөткән балаҫ ябынып, көпә-көндөҙ ҡур-шар килеп йоҡлап яталар ине. Өйҙә күңелде уҡшытырлыҡ нindəйҙер еҫтәр ҡатнашмаһы. Рәсилә иҙәнгә тубыкланып алған да түшен урындыҡ йөҙлөгөнөң ҡап уртаһына терәп, өҫ кейемендә көйө дәрес әҙерләй. Бишмәтен кейеп алған өләсәй тәҙрә янындағы һандыҡ һымаҡ нәмә өҫтөндә йөн иләп ултыра.

– Ярҙамға килдеңме, ҡыҙым? Бынауы эт тормошонда ни балаҡайыма рәхәтләнеп ултырып дәрес әҙерләрлек өҫтәл дә юк бит, исмаһам, – тине өләсәй, ҡоршалып бөткән күҙлеген төҙәтеп. – Эскелек нимәгә генә тарытмай әҙәм балаһын, – тип күҙ йәштәрен яулыҡ осо менән һөртөп алды.

Оло кешенең һүҙенә ҡапылғара төшөнөп тә етә алмаған Вәсилә:

– Этегеҙ ҙә ошо өйҙәме ни? Күренмәй бит, – тип тирә-яғына ҡаранды.

– Эт бәйләһәң дә торғоһоҙ һалҡын өйҙә ниндәй эт булһын инде, ҡыҙым. Йәйге йылыла ҡыш яғырлыҡ та утын хәстәрләмәгәс ни, – тине өләсәй, дерелдәп һелкенеп алып, бишмәт төймәләрен ҡаптырып ҡуйҙы.

**Исмәғил АҠЪЮЛОВ.**
**Көйөргәҙе районының**
**Маячный ҡасабаһы.**

**Венер ИСХАҠОВ**

# Ҡырын эш

## Хикәйә

Илшаттың был ҡәҙәр ҙә мәктәпкә ашыҡҡаны юҡ ине әле. Кисен тегеләй ҙә, былай ҙа борғоланып, тиҙ генә йоҡлап китә алманы. Йылы юрған эсенә сумыу менән телефонын ҡулына алды. Бигерәк яҡшы шул. Әлегә класта берәүҙең дә бындай телефоны юҡ. Үҙе фотоға төшөрә, үҙе яҙҙыра. Иртәгә класта буласаҡ күренеште күҙ алдына килтерергә тырышты малай. Ну, бөтәһе “ах” итәсәк, эстәре көтөрлә-йәсәк инде. Атаһы менән әсәһе улының үҙен сәйерерәк тотоуына ғәжәпләнгәндәй булды. Ахырҙа әсәһе:



– Балам, әллә берәй ерең ауыртамы? – тип һораны.

– Юҡсы, былай ғына.

Бына Илшат табаны ергә тейер-теймәҫ мәктәпкә ҡарай атлай. Белмәгән кеше уны дәрескә, яҡшы билдә алырға ашҡынып китеп бара, тип уйлар ине. Әммә һис улай түгел. Илшаттың уҡыу тип иҫе китеп бармай. Йыш дәрестәр ҡалдыра. “Икеле” алһа ла бик бошонмай, шикелле.

Класс етәксеһе Мәҙинә апай йыш ҡына:

– Илшат, нишләп тырышмайһың, теләһәң, “дүрт”кә, “биш”кә генә уҡый алаһың, – ти.

Илшат класҡа килеп ингәндә берәү ҙә юҡ ине. Иртәрәк шул. Малай кеҫәһенән телефонын килтереп сығарҙы ла бер килке һоҡланып ҡарап торҙо. Үҙ алдына “но, класно” тип ҡуйҙы. Уйындарҙың ниндәйе генә юҡ! Бүтәндәрҙең бындай телефон төшөнә лә ингәне юҡтыр әле.

Ул арала берәм-һәрәм класташтары килә башланы. Һәр береһе уның ҡулындағы телефонды күреп һоҡланды.

– Вәт, шәп!

– Ҡайҙан алдың?

– Кисә ҡаланан ҡунаҡҡа ағай килгәйне, тыуған көнөмә бүләк итте.

– Тотоп ҡарайым әле.

Был минуттарҙа класта Илшаттан да шәберәк кеше юҡ кеүек ине. Остоҡайыраҡ ҡыҙҙар, беҙҙе фотоға төшөр әле, тип сырылдашты. Малай бер башҡа үҫеп киткәнләй булды.

Дәрес ваҡытында ла Илшат ҡулынан телефонын төшөрмәне. Тәнәфестә лә башҡа көндәргә ҡарағанда йәнлерәк булды.

Алтынсы дәрескә уҡытыусы апай менән милиционер ағай килеп ингәс, бөтәһе лә һағайып ҡалды. Ул тиккә генә йөрөмәй торған. Әллә берәйһе тәртип боҙҙомо икән?

Һаулыҡ һорашҡас, ҡунаҡ бөтәһенә иғтибар менән ҡараны ла:

– Кем бында Яппаров Илшат була әле? – тип һораны.

– Мин, – тип тороп баҫты Илшат.

– Ҡустым, кисә магазинда балалар баҡсаһында тәрбиәсе булып эшләүсе Зөлфиә апайығыҙ телефонын онотоп ҡалдырған. Унда һин дә булғанһың икән. Һатыусы һинең өҫтәлдән ниндәйҙер телефон алыуыңды күргән. Был дөрөҫмө? – тине милиционер.

Класта тып-тын. Баяғы тәкәббер Илшат урынында, әйтерһең, бөтөнләй икенсе малай баҫып тора. Башы аҫҡа эйелгән. Ул ауыҙ эсенән башҡаларға ишетелер-ишетелмәҫлек итеп:

– Эйе, мин алдым, – тип саҡ әйтә алды.

Барлыҡ малайҙар, ҡыҙҙар бер-береһенә серле генә ҡарап йылмайҙы. Уларҙың ҡарашынан, бына һиңә тыуған көн бүләге, тигән һүҙҙәрҙе аңларға була ине.




# Төньяҡ башҡорттары тарихы эҙенән

Төньяҡ башҡорттарының юғалып-онотолоп, ергә күмелеп ҡалған боронғо ауылдарының бер нисәһен булһа ла эҙләп табып булмаҫмикән, тигән маҡсатта мин һуңғы йылдарҙа шаҡтай күп юлдар үттем, архивтарҙа, китапханаларҙа ҡаҙындым.

Һәм, ниһәйәт, тәүге табыш! Тыуған төйәгемдән ун биш саҡырым йыраҡлыҡта ғына урта быуаттарҙың һуңғы осоронда башҡорт ауылы булған да! Ә исеме уның – Ирәкте!

Был эшемдә шул уҡ йылды йәнә лә уңышҡа ирештем: Үрге Танып еренең урта быуаттарҙағы ауылдары ҡайһы тауҙарға һалынған булыуы асыҡлана башланы. Ошо икенсе уңышыма ирешергә бер осраҡлыҡ ярҙам итте.

Тыуған төйәгемә йыраҡ экспедициянан ҡайтып килеүем ине. Район үҙәгенән ауылыма алып барыусы оло юлға йәйәүләп кенә сыҡҡан инем, күрәм: унда бер ҡыҙ машина көтөп баҫып тора. Минең күрше ауыл Беләшкә ҡайта икән. Йәнәш атланыҡ. Тирә-яҡтың хозурлығы тураһында әңгәмә ҡорабыҙ.

– Беҙҙең яҡтағы тауҙарҙың иң матуры, иң бейеге – Ҡуян соҡор! – тине ул, - ауылымдың ул тауына мин йыш ҡына менеп йөрөйөм. Быйыл Беренсе майҙа шул тауҙың иң башына усаҡ яғып, Шәрҙәк ауылындағы дуҫ ҡыҙымды байрам менән ҡотланым. Зәңгәр һауаға аҡ төтөн һуҙып ҡотланым. Ут яғыуыма ике минут та үтмәне, йыраҡтағы Шәрҙәк тауҙан да аҡ төтөн күтәрелде, тимәк, дуҫ ҡыҙым да мине ҡотлай. Икебеҙ ике тауҙан шулай бер-беребеҙҙе Беренсе май байрамы менән тәбрикләрбеҙ тип алдан уҡ һөйләшеп ҡуйғайныҡ...

Быларҙы ишетеп, мин, тарихсы, хайрандар ҡалдым. Бына бит ул, ике йәш ҡыҙ ниндәй тапҡырлыҡ күрһәткән! Тимәк, аҡ төтөн, йәғни, тауҙан-тауға яҡты хәбәр! Ә бит төтөндөң ҡараһы ла була. Бейек тау баштарынан зәңгәр күккә ҡара төтөн бағаналары күтәреп, электән, бик электән, беҙҙең боронғо бабайҙарыбыҙ илгә-ергә ҡара яу, дошман яуы килгәнен әйләнә-тирә ауылдарға, күрше ырыуҡәбиләләргә хәбәр итә торған булғандар...




Әйтәйек, боронғо бабайҙарыма Үрге Танып ерендәге ҡала тауҙарының береһенән, Ыйыҡ (Йоҡ) йылғаһы бассейнындағынан, йыраҡҡа, төньяҡҡа – Тулва йылғаһы буйында йәшәүсе ырыуҙаштарына ашығыс рәүештә хәбәр бирергә кәрәк булған, ти. Ҡыртаныптарҙың ошо Ҡала тауына төньяҡ йүнәлештә иң яҡын бейек түбә – Шәрҙәк тауы, уларҙың аралары алты саҡырым. Ҡала тауҙан ҡара төтөн күтәрелә башлағанын Шәрҙәк тауҙағы ҡарауылсы башҡорт шунда уҡ күрәсәк. Һәм күреү менән ул да үҙенең усағын дөрләтәсәк – Ҡала

тауҙан ҡабул ителгән дәһшәтле хәбәрҙе тиҙерәк Ҡуян Соҡорға тапшырырға кәрәк. Ара – ете саҡырым.

Артабан ошо система буйынса хәбәр Ҡый өгө – Бейек түбә – Ҡапҡан тау юлы менән Тулва йылғаһының үрге ағышына барып еткән. Эйе, беҙҙең ул тауҙар – башҡорт бейеклектәре – бик күптәнән, хатта урта быуаттарҙың аҙағында ла ҡарауыл, ырыу-ара элемтә хеҙмәтен үтәгән, булһа кәрәк. Башҡорт халҡының тарихын өйрәнеүсе белгестәргә күптән таныш документтар менән бергә ун туғыҙынсы быуаттың мәшһүр башҡорт шағиры Ғәли Соҡоройҙоң шәжәрәһендәге мәғлүмәттәрҙе лә файҙаланһаҡ, Әри буйына һәм Танып еренә ирәктеләр ун бишенсе быуаттың аҙағында уҡ килеп донъя көтә башлағанлығын белә алабыҙ. Төрлө сығанаҡтарҙан миңә Ғәли Соҡорой шәжәрәһенең өс варианты мәғлүм. Уның алтындай баһаһы, минең ҡарашҡа, уның исемдәр теҙмәһендә түгел, ә Ирәкте ырыуының ун алтынсы быуатта төп төйәге – Әри буйы тигән дөрөҫлөктө иҫбат итер өсөн һолло ғына дәлил булыуында.

Йырҙарҙа данланған гүзәл Әри йылғаһының урта һәм түбәнге ағымындағы хәҙерге ауылдар барыһы ла – Башҡорттоң Ирәкте ырыуы йәнтөйәктәре. Шуларҙың береһе – Иҫке Соҡор ауылы (Ғәли Соҡоройҙоң тыуған ауылы), архив документтарынан һәм ирәкте риүәйәттәренән белеүебеҙсә, күптәнән бирле ирәкте башҡорттарының төп төйәге һанала. Был уңайҙан шуныһына ла иғтибар итеп китеү мотлаҡ. Иҫке Соҡорҙан һәм уның “Иҫке йорт” тип аталған ер-урынынан ике саҡырым самаһы йыраҡлыҡта бейек бер тау (Ҡалатау) тирә-яҡты ғорур байҡай. Шул Ҡалатауҙан Ҡуян Соҡорға тура һыҙыҡ һыҙһаң, ул һыҙыҡ Ҡарауай тауын да киҫеп үтер ине. Ҡарауайтауға килеп һыйынған урман кварталын параллель йүнәлештә киҫеп үтеүсе күптәнге тракттың хәҙерге заманда ла урындағы атамаһы – Губернатор юлы, Ҡарауайтауҙың икенсе исеме – Ҡалатау!

Үкенескә ҡаршы, Ҡарауайтауҙа элек ниндәй булһа ла бер ауылдың булған-булмағанын Беләш ҡарттары теүәл әйтә алманы. Ә Беләш ауылының ҡасан төҙөлә башлауы тураһында улар миңә түбәндәгеләрҙе бәйән итте: Беләшкә нисә йәш икәне мәғлүм түгел, беҙҙең ауыл элгәре Ҡарауайтауҙа ултырманы микән, тип уйлайбыҙ, сөнки Беләш ауылының үҙенең әүәлге урынында түгеллеген ҡарттарҙан элек ишетеп ҡалғанбыҙ. Беләш ауылы хәҙерге урында 1859 йылда һалына. Тарихи сығанаҡтан теүәл билдәле булыуынса, Беләш ауылы нигеҙен танып ырыуының Иҫке Ҡайпан, Бүләгәрт (Әйбә-әйле йорт), Кәлтәү, Салдау һәм Шәрҙәк ауылдары башҡорттары төҙөй.

1795 йылда халыҡ иҫәбен алыу ревизияһы Үрге Танып еренән башҡорт ауылдарынан ни бары Мотабашты һәм Кәлтәүҙе генә теркәгән. Улар икеһе лә егерменсе быуатҡа иҫән-имен килеп етә алған. Ә ҡалғандары? Тарихсы Н. Устюговтың “Башкирское восстание 1737-1739 годов” хеҙмәтендә 1937 йылдың  көҙөндә Үрге Таныпта башҡорттарҙың ете ауылын Рәсәй батшаһының карателдәре утҡа осороуы хаҡында һүҙ бара. Шуныһы ла йөрәкте әрнетә: геноцид утында көлгә әйләнгән шул ете ауылдың береһенең дә исеме беҙгә билгеле түгел, тимәк, был яҡлап та тарих фәне бөйөк башҡорт халҡы ҡаршыһында бурыслы.

**Рауил ИСЛАМШИН,**
**журналист, тарихсы, яҙыусы.**
**Тәтешле районының**
**Бәҙрәш ауылы**

**ҺҮРӘТТӘ: Асҡын районының Солтанбәк ауылы эргәһендә ҡәһәрле Тәфтиләү яндырған Һөйәнтүз ауылы фажиғәһе ҡорбандарына ҡуйылған һәйкәл.**

Бөйөк еңеү

# Өләсәйем – тыл ветераны

Өләсәйем, Ғәбиҙуллина Ғәлиә Абдрахман ҡыҙы, 1931 йылдың 5 февралендә Бөрйән районы Исламбай ауылында тыуа.

1941 йылдың август айында атаһы, Әхмәтйәнов Абдрахман Абдулла улы, һуғышҡа китә. Әсәһе колхоз эшенән бушамай. Ғаиләлә иң оло бала булараҡ, үҙенән бәләкәй дүрт баланы ҡарау, өй эштәрен эшләү уның иңенә төшә.

– Ауылда техника юҡ, кеше әҙ, һуғыштан ҡайтҡан кешеләр – инвалид, һуғышҡа бара алмағандарҙы трудармияға ебәрҙеләр. Йәш ҡыҙҙар үгеҙ егеп, һабан һөрҙөләр. Яҙын сәсеү, йәйен бесән әҙерләү, көҙөн уңыш йыйыу – бар хеҙмәт ҡул көсө менән башҡарыла. Мәктәп уҡыусылары, 1-2 сәғәт уҡығас, башаҡ йыйырға, картуф ҡаҙырға сыға торғайнылар, – тип иҫләп ала өләсәйем ул ауыр замандарҙы. – Өйгә йүкә ҡабығы килтереп китәләр, шунан беҙ кис һайын һигеҙ йәшлек һеңлем Зәйнәп менән йүкә һыҙырып алып, арҡан ишә торғайныҡ. Уныһы вагондарға тейәп, фронтҡа оҙатҡан йөктө бәйләр өсөн кәрәк, ти торғайнылар. Йәй етһә, һәр ғаиләгә көнөнә 70 сутый бесән сабырға норма биреләторғайны. Сыуал яҡты тип, беҙҙең өйгә йыйылышып, бәйләм бәйләй торғайнылар. Налог тип, һыйырҙың майын бөткәнсе хөкүмәткә тапшыртып барҙылар.

1943 йылда атаһынан “ҡара ҡағыҙ” килә.

Ашарға аҙыҡ, кейергә кейем булмағас, 1944 йылдың ғинуарынан өләсәйем дүрт туғаны менән Байназар ауылындағы балалар йортонда тәрбиәләнә.

– Оло класс уҡыусылары колхоз эшенә, балалар йортона утын әҙерләргә китһәләр, үҙемдән бәләкәйҙәргә тәрбиәсе итеп ҡалдыра торғайнылар, – тип хәтер йомғаҡтарын һүтеп ала ул. – 1945 йылда 5-се класты бөтөргә йөрөгәндә, тәрбиәселәр “һуғыш бөттө” тип ауыл буйлап әйтергә сығарып ебәрҙеләр. Ҡыуанышып, өй һайын ишек асып, әбейҙәргә (башҡалар ҡырҙа эштә булғандыр инде) “һуғыш бөттө” тип йөрөгәндә, ҡапыл атайым иҫемә төштө. “Минең атайым ҡайтмай ҙа инде”, – тип хәлем бөтөп ултырҙым.

Һуғыштан һуң, 1947 йылдарҙа аслыҡ башланды. Атайһыҙ үҫеү үтә лә ауырға тура килде. Ир бала эшен эшләп өйрәндек. Иң насар нәмә – атайһыҙлыҡ, етемлек. Атайҙар һау булһын инде. Әсәйгә әҙ булһа ла ярҙам булһын тип, ете класс белем менән сикләнеп, бала ғына көйөмә колхозға эшкә сыҡтым. Яҙғыһын үгеҙ егеп, тырма тырматтым, һыйыр ҙа һауҙым, ҡырҙа ятып, һарыҡ та көттөк – эште айырмай, ҡулдан килгәнсә тырышып эшләнек. Эшләй белмәгән эш булманы. Һуғыш ваҡытында, һуғыштан һуң бөтә балалар кисергәнде кисерҙек. Беҙ мәктәптә уҡығанда дәреслектәр, дәфтәрҙәр булманы. Уҡытыусы һөйләгәнде тыңлап ултырып, икенсе дәрестә барып һөйләй торғайныҡ. Дәфтәр булмағас, иҫке китаптарҙың юл araларына яҙа торғайныҡ. Ҡауырһынды сыбыҡҡа бәйләп, ручка эшләп ала инек. Ҡайын тәрәшенән (чага) йәки имән япрағының аҫтындағы оронан ҡара эшләп ала торғайныҡ, – тип иҫкә ала өләсәйем.

1951 йылда улар Аҫҡар ауылынан Ғәбиҙуллин Яхъя Абдулхаҡ улы менән ғаилә ҡороп ебәрәләр.

Олатайым менән 55 йыл бергә татыу ғүмер кисереп, ете балаһына матур тәрбиә биреп, белем алырға ярҙам итеүсе лә, ғүмерҙең ҡәҙерен белеп йәшәргә, тырышып эшләргә өндәп, һәр ваҡыт аҡыллы кәңәштәр биреүсе лә ул өләсәйем.

**Айгүзәл ЙӘНСУРИНА,**
**Бөрйән районы,**
**Нәби мәктәбе уҡыусыһы.**

# Нөгөш биштажы

Тау йылғаларының юлдары урау-урау булғанын беләбеҙ. Көньяҡ Урал йылғаларының бер ерҙән ҡарағанда бер юлы ике яҡҡа ла ағып ятҡан урындарын да күрергә тура килә хатта.

Ә бына Нөгөш йылғаһы Мәләүез районында ике тау араһына инеп китә лә, сыға алмай уралып бик оҙаҡ йөрөй. Кибәҙе менән Ямантау һырттары араһындағы был мөғжизәле урынды туристар “биштаж” – “пятилистник” тип йөрөтә. Картала бер шаҡмаҡ кына ҙурлыҡ ергә килеп кергән йылға матур ҡая ташлы йырҙаларҙа түбән табан юл эҙләп ҡарай ҙа, биш тапҡыр кире әйләнеп сыға. Шуға ла ул урын өҫтән ҡарағанда зәңгәр менән ҡаймалған сәскә тажын хәтерләтеп ята. Был урын “Башҡортостан” милли паркына инә.












„АМАНАТ" журналы
ЙОНДОҘЛОҒО
2010


Фәриҙә Ғаззалова









## GMC Sierra

Егерменсе быуат башында АҠШ-ҡа барып үҙ эштәрен асҡан поляктар, General Motors компанияһы менән берләшеп, ваҡ-төйәк ташыу өсөн ҡулайлаштырылған ҙур булмаған йөк машинаһы сығара башлайҙар. Биш метрҙан ашыу оҙонлоҡтағы был машина ике генә ишекле, үҙ ике тонна самаһы ғына тартыуына ҡарамаҫтан, шул самаһы ауырлыҡтағы йөктө тейәй, өҫтәүенә туғыҙ тонналыҡ арбаны ла тағып ала. Бының өсөн ул бензинда эшләүсе алты цилиндрлы мотор менән йыһазландырылған.

"Форд" маркаһынан һуң АҠШ-та икенсе урында торған был йөк машиналарының, хәрбиләштерелгән варианттарын да ҡушып, 1,5 меңләп төрө бар.

# «Аманат» коллекцияһы



## БМП – 3

Йәйәүле ғәскәрҙең "аяғы" булған был техника Ҡурған ҡалаһында етештерелә, Рәсәй ҡораллы көстәренән тыш Ғәрәп әмирлектәре, Кипр, Кувейт һәм Көньяҡ Корея армияларында ла бар. Өс кешелек экипажы менән ете кешелек десанты, ракеталар ҙа ата торған 100 һәм 30 миллиметрлыҡ пушкаһы һәм ике пулеметы булған, зенитка комплексы менән дә ҡоралландырылған был машина һуғыш яланында үҙаллы хәрби берәмек булып сығыш яһай. Элегерәк сығарылған БМП-2 моделенән айырмалы, БМП-3 төрлө илдәрҙең хәрби көстәрендә ҡулланылған барлыҡ оҡшаш техникаларҙың иң алдынғы ҡаҙаныштарын үҙенә туплаған. 2,4 метр бейеклектәге, пушкаһы менән 7,2 метр оҙонлоҡтағы машина сәғәтенә 70 саҡырым тиҙлектә йөрөй, һыуҙа йөҙә, һауанан парашют менән төшә, диңгеҙҙән десант караптарынан сыға ала. Төп моделенән тыш, был машинаның төрлө маҡсаттарҙа ҡулланыла торған бер нисә модификацияһы бар.







# Салауат һандуғасы

**Белешмә**

**Тулы исеме: Фәриҙә Йәғәфәр ҡыҙы Ғаззалова;**

**Тыуған көнө: 1984 йылдың 16 майы;**

**Яратҡан ҡалаһы: Өфө;**

**Яратҡан миҙгеле: йәй;**

**Яратҡан төҫө: алһыу, зәңгәр.**

**Ҡаҙаныштары – халыҡ йырҙарын башҡарыусыларҙың “Ирәндек моңдары – 98” конкурсында - өсөнсө, 2006 йылда ошо уҡ бәйгелә икенсе урынға лайыҡ була. “Гәлсәр һандуғас – 2006” телевизион конкурс-фестивалендә “Өмөт” номинацияһын яулай.**

Һәләтле йәш йырсы Фәриҙә Ғаззалова тамашасы күңеленә “Томбойоҡтар”(Ф. Сәлихов һүҙҙәренә Р. Зарипов музыкаһы) йыры менән үтеп инде. Искәндәр Ғәзизов менән бергәләп башҡарған “Парлы шыршылар” дуэтын да сәнғәт һөйөүселәр йылы ҡабул итте. Ҡотлау һүҙҙәре һәм сәләмдәренән торған “Йырым булһын бүләгем” тапшырыуында ла Фәриҙәнең “Оҙаҡ йәшә, әсәй” йырын йыш ишетергә тура килә. Был һанда журнал уҡыусыларыбыҙҙы йәш йырсы менән яҡындан таныштырабыҙ.



**– Фәриҙә, иң тәүҙә үҙең менән таныштырып китһәң ине.**

– Салауат районының Лағыр ауылында тыуып үҫкәнмен. Ләйлә һеңлем менән бик йәшләй әсәйҙән ҡалып, олатай-өләсәй тәрбиәһендә үҫтек. Икебеҙ ҙә баш ҡаланың Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге республика интернат-гимназияһында белем алдыҡ. Мин – скрипка, ә Ләйлә виолончель синыфын тамамланы. Аллаға шөкөр, бөгөнгө көндә өләсәй менән олатай иҫән-һауҙар, ҡура тултырып мал-тыуар аҫырайҙар, баҡса үҫтерәләр.

**– Һеңлең дә йырлаймы?**

– Эйе. Ләйләнең тауышы хатта минекенә ҡарағанда ла матурыраҡ. Әммә ул сәнғәт юлынан китергә теләмәне, Башҡорт дәүләт аграр университетына уҡырға инде. Йырмоңға һәләт беҙгә әсәйем мәрхүмәнән күскән. Ул бик оҫта йырлаған, бейегән, мәктәптә бейеү түңәрәге лә алып барған.

**– Йырсы булыу теләге ҡасаныраҡ яралды?**

– Гимназияла уҡығанда бейеү, театр түңәрәктәренә йөрөнөм. Алтынсы синыфта, Фәрит Камаев исемендәге конкурста ҡатнашып, скрипкала уйнап һәм йырлап, диплом яуланым. Өлкән синыфтарҙа билдәле йырсы Тәнзилә Үҙәнбаева алып барған вокал түңәрәгендә шөғөлләндем. Тәнзилә апай “Зөлхизә”, “Ғилмияза” кеүек халыҡ йырҙарын да өйрәтте. Мәктәптән һуң Өфө сәнғәт училищеһының вокал бүлегенә барҙым. Уны тамамлағас, мәктәптә бер йыл йыр уҡытыусыһы булып эшләнем. 2005 йылда З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһына уҡырға инеп, быйыл диплом алдым.

**– Йыр менән мауығып, скрипкала уйнауҙы ташлап ҡуйманыңмы?**

– Юҡ. Скрипкама шундай өйрәнгәнмен, уйнаһам, күңел таҙарып, кәйеф күтәрелеп киткәндәй була. Киләсәктә скрипка менән тамашасы алдында ла сығыш яһарға хыяллананам.

**– Ғаилә хәлең нисек?**

– Тормоштамын. Уң ҡанатым Илнур менән театрҙа спектакль ҡарағанда таныштыҡ. Сәнғәт кешеһе булмаһа ла, мине аңлай, ижадым менән ҡыҙыҡһынып тора.

**– Хоббийың бармы?**

– Илнур менән хоккей матчтарына йөрөйбөҙ, “Салауат Юлаев”тың бер уйынын да ҡалдырмаҫҡа тырышабыҙ. Тағы гөл үҫтереү менән мауығам.

**– Йәш йырсыларҙан кемдәр менән аралашаһың?**

– Рөстәм Шаһыбалов, Искәндәр Ғәзизов, Рәдиф Зарипов, Ришат Төхфәтуллин.

**– Журнал уҡыусыларға нимә теләрһең?**

– Иҫәнлек-һаулыҡ, яҡшы кәйеф һәм уҡыуҙарында уңыштар теләйем. Башҡорт көймоңдарынан айырылмаһындар, халҡыбыҙҙың лайыҡлы ул һәм ҡыҙҙары булып үҫһендәр!

**Нурия ФАЗЛЫЕВА әңгәмәләште.**

“Аманат” йондоҙлоғо

Рәдиф ТИМЕРШИН

# Йомро-йомро йомаҡтар, Бик тә серле һымаҡтар

Сөм-ҡара ашъяулыҡтың
Уртаһында – аҡ табаҡ.
Ялтыр сынаяҡтарҙы
Бөтөрлөк түгел һанап!
(Ай һәм йондоҙҙар)

Юҡтыр уның үҙ юлы,
Ул бары тик ел ҡоло.
Күккә менә быу булып,
Ергә төшә һыу булып.
Быны ниндәй ул… .
(Болот)

Аҡ булһа ла, һөт түгел,
Күп булһа ла, йөк түгел,
Һыу буйында ярала,
Ҡояш сыҡһа, тарала.
(Томан)

Иретһәң, һыу була,
Ҡайнатһаң, быу була.
(Ҡар)

Уҙып китмәй,
Артта ҡалмай,
Айырылып
Китә алмай,
Ҡайҙа барһаң,
Шунда бара.
Был ни була?
Әйтеп ҡара!
(Күләгә)

Айырып булмай был ҡоштоң
Исемен есеменән,
Һоҡландыра бөтәһен дә
Аҡтан аҡ төҫө менән.
(Аҡкош)

Ул көньяҡтан
Беҙгә килә,
Һәләте бар –
“Һанай белә”.
Был ниндәй ҡош?
Бирсе әйтеп!
Әйтәм, әйтәм,
Был бит – … .
(Кәкүк)

Көндөҙ ул насар күрә,
Тап быны шуға күрә,
Үҙ ҡорбанын һағалап,
Төндә тора самалап.
Был ниндәй ҡош?
(Ябалаҡ)

Семерләп китте арҡам –
Алдымда – тере арҡан!
Минең хәлде кем белә?
Шыуып-шыуып кем килә?
(Йылан)

Был йәнлектең кейеме –
Шып-шыма таш өйөмө.
Кемдәр белмәй баш вата?
Әйтеп бирәм: … .
(Ташбаҡа)

Ә был йәнлектә –
Бик оҙон муйын,
Баҫҡыс һөйәп тә
Менеүе ҡыйын.
(Жираф)

Кубала йә Вьетнамда
Күпләп үҫә был ағас.
Бик алыҫтан килтерәләр,
Үҙебеҙҙә булмағас.
Үҙе еңел, үҙе шыма,
Үҙе төп-төҙ, үҙе ныҡ.
Балыҡсы йә саңғысының
Уны хурлар һүҙе юҡ.
(Бамбук)

Ул хас бойҙай орлоғо –
Шундай ғына ҙурлығы.
Етһен әле йәй генә –
Ул япраҡҡа әүерелә!
(Бөрө)

Үҫә урманда,
Урманда тыуғас,
Ямғыр теләй ул,
Зонтигы булғас.
(Бәшмәк)

Бүре күрмәһен өсөн,
Үҙгәртә ала төҫөн.
Йәйен – һоро, ҡышын – аҡ,
Үҙе ҡурҡаҡ, үҙе һаҡ.
(Ҡуян)

“Т” хәрефенә оҡшаш был
Оҫтаға кәрәк ҡорал.
Һыры бар урау-урау.
Был нимә? Был бит – … .
(Бырау)

Был ҡорал менән
Шымартып алғас,
Ялт итеп ҡала
Ҡытыршы ағас.
Түңәрәкләнеп
Оса юнысҡы.
Оҫта ҡулында
Нимә ул?
(Йышҡы)

Яҡын итә йыраҡты,
Күп тапҡырға ҙурайтып.
Астроном ағайҙар
Шуның аша ҡарайҙар.
(Телескоп)

Әй, күп тә һуң тештәре,
Әй, күп тә һуң эштәре!
Ағасты “ашай-ашай”,
Төрлө әйберҙәр яһай.
(Бысҡы)

Йәй көнө лә өй эсендә
Боҫоп тора һыуыҡ ҡыш.
Һыуыҡ ҡышты нимә яһай?
Һуң, әлбиттә, … .
(Һыуытҡыс)

Ауыҙы юҡ, теле юҡ,
Һөйләмәгән көнө юҡ.
Бер ҙә тынып тормай ул,
Һөйләп туйғас, йырлай ул.
(Радио)

Ныҡ бәрелһәң, ыуала,
Ватылыусан … .
(Быяла)

Бер ни ҙә киҫә алмаҫ,
Уны киҫә тик … .
(Алмас)



# Уралым йәйғорҙары




Кешенең тәбиғәте шулайыраҡмы икән: аяҡ аҫтындағын һәм ҡул осондағын күрмәй, әллә ҡайҙарға ашҡына ла тора ул. Шулай ҙа был күберәк кешенең мәғлүмәтһеҙлегәнән килеп сығалыр. Ни генә тимә, Ҡырымды һәм Төркиә курорттарын телевизорҙан күберәк күрһәтәләр, ә үҙебеҙҙең мөғжизәле урындар тураһында “йәшник” әҙ һөйләй…

Мәсәлән, барыһына ла таныш ҡоштар донъяһын ғына алайыҡ (барыһына ла, сөнки ҡоштар менән бөгөн ҡалалар ҙа тулған). Беҙ әллә ҡайҙағы ожмах ҡоштары, тутыйғоштар, кәнәриҙәрҙе күреп йөрөйбеҙ. Ә бына үҙебеҙҙә, Урал төбәгендә уларҙан да матурыраҡ ҡошсоҡтар




йәшәп ятыуын беләбеҙме һуң? Уларҙың барыһы ла беҙҙең өсөн – ябай турғайҙар ғына, хатта исемдәрен дә белмәйбеҙ әле.

Шундай сағыу матурлыҡ донъяһында һеҙҙе бер аҙ белемлерәк итер өсөн, беҙ Башҡортостанда йәшәгән сағыу ҡоштарҙың фотоһүрәттәрен бер биткә йыйҙыҡ. Уларҙың байтағын һеҙҙең күргәнегеҙ ҙә барҙыр моғайын. Тик барыбер: “Ҡара, ниндәй матур турғай!” – тип һоҡланыуҙан ары китмәгәнһегеҙҙер. Бына, буласаҡ биологтар өсөн тағы бер мәсьәлә – тәбиғәттә әле кеше асып бөтә алмаған бихисап темалар араһында ҡоштарҙың аныҡланмаған исемдәре лә бар.

Таныш булығыҙ, бына улар – Уралыбыҙҙың “ожмах ҡоштары!”

1. Урман кәнәриһе – зеленушка, дубоноска
2. Әберсә турғайы – малиновка, зарянка
3. Ҡыҙылғойроҡ – горихвостка
4. Көйәҙ турғай, ҡупшыҡай – щегол
5. Ҡыҙылтүш – снегирь
6. Һарығош, үтәбикә – иволга
7. Мышар турғайы – свиристель
8. Ҡыҙылтүш – зяблик
9. Алаҡас турғай – чечетка
10. Ҡарабаш турғай – синица большая
11. Бараба – сойка
12. Шыршы турғайы – клест
13. Сыбар тумыртка - дятел
14. Киндер турғайы – коноплянка, реполов
15. Боҙ тишкес – зимородок
16. Ҡарағай турғайы – щурка
17. Буран турғайы – лазоревка
18. Һоло турғайы, ҡамыш турғайы, һылыуҡас – овсянка
19. Ҡыр күгәрсене – горлица
20. Һары турғай – чиж






# Өрмәй ҙә, ебәрмәй ҙә...

Гәзиттәрҙә йыш ҡына “Хеҙмәт күрһәтәбеҙ” рубрикаһы аҫтында “йоҙаҡ ҡуябыҙ” һымаҡ иғландар ҙа баҫыла. Шулай уҡ ҡатмарлы эшме икән ни, оҫта тиклем оҫтанан йоҙаҡ ҡуйҙырып тороу, тип тә уйлаусылар бар. Әлбиттә, белгән кешегә уның бер нәмәһе лә юҡ. Сөнки уҙ – үҙенә ышанғандар бәләкәйҙән ҡулына сүкеш, балта тотоп, һәр эште өйрәнеп үҫкән булалар. Шуға ла, ҡурҡып тормайынса, теләһә ниндәй эшкә лә тотоналар. Ә быны өсөн, малайҙар, әлеге йәштән үк тормошта кәрәге сығып торор һөнәрҙәргә өйрәнеү мөһим .

“Оҫтахана”ның был сығарылышында йоҙаҡ ҡуйыу серҙәрен асмаҡсыбыҙ.

Иң беренсе ишек яңағы менән рамына йоҙаҡ ҡуйырға тейешле урынды билдәләйҙәр. Йоҙаҡ бейеклегенең уңайлы ерҙә булыуы мөһим. Шунан һуң, 1-се һүрәттә күрһәтелгәнсә, паз йәки уйымдың ҡайһы урындалығын самалайҙар, бырау менән һыҙманың эсен тишкеләп сығалар. Әйткәндәй, бырауҙың диаметры уйыласаҡ тишектекенән тарыраҡ булырға тейеш. Һуңынан ҡасау менән тишектәрҙе тоташтыралар.

1-се һүрәт



Уйымдың тәрәнлеген йоҙаҡты ҡуйып билдәләйҙәр. Йоҙаҡ тейешле кимәлгә инеп ултырғас (2-се һүрәт), тимер планка өсөн өҫтәмә 2-3 мм-ға эскәрәк соҡойҙар. Был планка йоҙаҡты нығыта, уны ишек яңағына беркетелгән ошондай уҡ планкаға ышҡылыуҙан, емерлеүҙән һаҡлай.

“Оя”һына ныҡлап инеп ултырғас, уны кире алаһың да, “оя” турыһына тыш яҡтан йоҙаҡты ҡуяһың. Һыҙмаһын һыҙғас, цилиндр формаһындағы механизм (“секрет”) урынын беҙ (шило) менән билдәләйһең (2-се һүрәт, А).

2-се һүрәт



Әйтергә кәрәк, ҡайһы йоҙаҡта ике яҡлап тотҡалар ҡуйыу өсөн дүртмөйөш үҙәк (стержень) тә була (2-се һүрәт, Б). Беркетеү өсөн винт урыны ла (2-се һүрәт, В) тишелә. Унда ишекте ябыу менән элена торған элгестең (защелка) булыуы мөмкин. Уның “переключателе” лә винт эргәһендә уйылырға тейеш. Барыһын билдәләп бөткәс, тишектәр тейешле кимәлдә нығытыла.

Ишек яңағына беркетелер планка урынын, шул иҫәптән йоҙаҡ элгесе инер уйымды ла алдан һыҙалар. Быны өсөн иң тәү йоҙаҡ теленең осҡо яғы буялыусы матдәлә буятыла (май, буяу һ.б.) Шунан һуң йоҙаҡ теле бикләнеү яғына табан борола. Яңаҡта эҙе ҡалғас,өҫтөнә планка ҡуйып һыҙыла ла “тел” урыны уйыла. Планка беркетелер тишектәр бороласаҡ шөрөптән нәҙегерәк бырау менән тишелә.

Әгәр ҙә йоҙаҡ ҡаршылыҡһыҙ ғына асылып ябылһа, моратығыҙға өлгәштегеҙ, тағы бер һөнәр үҙләштерҙегеҙ тигән һүҙ.

**Рәлис УРАҘҒОЛОВ.**




Әлфизәгә – 14 (Игеҙәк), Гөлфинәгә 15 йәш (һыуғояр). 14-16 йәшлек ҡыҙ һәм егеттәрҙән хат көтәбеҙ.

**Ҡаһарманова Әлфизә.**
**453580, Бөрйән районы,**
**Яңы Усман ауылы,**
**Шайморатов урамы, 20.**
**Т.: 89656463168.**
**Муллағолова Гөлфинә.**
**Зәки Вәлиди урамы, 23.**

***

16 йәш. Шөғөлдәрем: волейбол, футбол уйнау. 15-17 йәшлек ҡыҙ һәм егеттәрҙән хат көтөп ҡалам.

**Хәсәнов Артем.**
**453740, Учалы районы,**
**Ҡунаҡбай ауылы,**
**Шәкирйән Мөхәмәтйәнов урамы, 1**.

***

16 йәш. Арыҫлан. Яратҡан йырсыларым – Радик Юльякшин, Dany, Анжелика, Рәил Өмөтбаев. 15-17 йәштәге ҡыҙ һәм егеттәрҙән смс-хәбәр йәки хат көтөп ҡалам.

**Хәмитов Нәзиф.**
**453678, Баймаҡ районы,**
**Буранбай ауылы,**
**Тирәк урамы, 7.**
**ICQ: 469935847.**
**Т.: 89093523482.**

***

13 йәш. Кәзәмөгөҙ. 13-14 йәшлек ҡыҙ һәм егеттәрҙән смс-хәбәр көтәм.

**Ғәниуллина Юлиә.**
**ICQ: 642245084.**

***

11 йәш. Төрлө аш-һыу бешерергә, сигеү сигергә һәм китап уҡырға яратам.

**Талипова Азалия.**
**452098, Миәкә районы,**
**Сафар ауылы.**
**Т.: 89279581728.**

***

11 йәш. Юлбарыҫ. Йырсыларҙан Радик Юльякшин, Анжелика, МС Баш оҡшай. 11-13 йәшлек ҡыҙҙарҙан хат көтәм.

**Хәйруллина Розалия.**
**453615, Әбйәлил районы,**
**Әхмәт ауылы.**

10 йәш. 10-12 йәшлек ҡыҙ һәм малайҙар менән танышҡым килә.

**Дәүләтова Гөлшат.**
**452380, Аскын районы,**
**Упканкүл ауылы,**
**Партизан урамы, 21.**
**Т.: 89273513149.**

***

11 йәш. Уксы. Буш ваҡытта музыка тыңларға, һүрәт төшөрөргә, ҡул эштәре менән булышырға яратам. Йәштәштәремдән хаттар көтәм.

**Вәлиева Азалия.**
**453833, Сибай ҡалаһы,**
**108 км урамы, 2,**
**1-се фатир.**

***

13 йәш. Ҡыҙ. Тыуған көнөм – 31 августа. 13-17 йәшлек ҡыҙ һәм малайҙарҙан хат көтәм.

**Аҙнағолова Ҡарлуғас.**
**453387, Ейәнсура районы,**
**Сирғол ауылы,**
**Үҙәк урам, 2б.**

***

14 йәш. Уксы. Волейбол, баскетбол уйнарға яратам, бейеү тәңәрәгенә йөрөйөм, шиғырҙар яҙам. 13-16 йәшлек ҡыҙ һәм егеттәрҙән хат йә смс-хәбәр көтөп ҡалам.

**Вәлиева Вәлимә.**
**453658, Баймаҡ районы,**
**Ярат ауылы,**
**Хөсәйен Әхмәтов урамы, 9.**
**Т.: 89613608044.**

***

1999 йылдың 22 ғинуарында тыуғанмын. Тиҫтерҙәрем менән хат алышырға теләйем. Үҙем тураһында: китап уҡырға, бейергә яратам, тыумыштан саф блондинкамын.

**Нурғәлина Азалия.**
**452563, Мәсетле районы,**
**Айып ауылы,**
**Афзал Таһиров урамы, 40.**
**Т.: 89625438512.**

*Ҡәҙерле дуҫтар! Журналда яҡындарығыҙға, дуҫ-иштәрегеҙгә СМС-сәләмдәрегеҙҙе баҫтыра алаһығыҙ. Бының өсөн 3443 номерына смс ебәрегеҙ. Тик хәбәрҙе яҙғас, “Хат” префиксын ҡуйырға онотмағыҙ.*

Ай, һылыу!

# Урағай һылыуы

**Таныш булайыҡ, мин – Ралина Йосопова. Баймаҡ районының Басай ауылынан булам. Икенсе синыфты тик "бишле" билдәләренә тамамланым. Бейергә, шиғыр һөйләргә, әҙәби китаптар уҡырға, һүрәт төшөрөргә яратам. Мәктәптә үткәрелгән төрлө сараларҙа ихлас ҡатнашам. Өйҙә атай – әсәйемә ярҙам итәм, бәләкәс һеңлем Айзиләне ҡарашам. Мәктәптә "Дан минуты" конкурсында, Рафаэль Сафиндың "Ҡыр ҡаҙҙары" поэмаһын һөйләп, призлы урын алдым.**





**Әлизә Сафина, Белорет районының Берештамаҡ ауылынан:**
"Йырларға, бейергә әүәҫмен. Буш ваҡытымда әсәйемә өй эштәрендә ярҙам итәм. Ҙур үҫкәс, йырсы булырға хыялланам."



**Камилла Ишмәтова, Баймаҡ районының Темәс ауылынан:**
"Гел "бишле"гә өлгәшәм. Бәйләргә, китап уҡырға яратам. Хыялым – табип булыу."



**Юлиә Хисмәтуллина, Белорет районының Сосновка ауылынан:**
"Мин алсаҡ, шат күңелле һәм бик теремек ҡыҙмын. Футбол уйнарға яратам, шәп бейейем. Һәр төрлө конкурстарҙа ҡатнашып, еңеү яуларға тырышам."



**Айгүзәл Аҫҡарова, Ейәнсура районының Ярғайыш ауылынан:**
"Йондоҙнамә буйынса Ҡуҙымын. Шөғөлдәрем: һүрәт төшөрөү, ҡул эштәре менән булышыу һәм йыр-бейеү."

# Буйың нәфис, тиһендәр...



Ҡыҙҙар, егеттәр иң тәү сиратта беҙҙең нимәгә иғтибар иткәнен беләһегеҙме? Белмәһәгеҙ, әйтәбеҙ: кәүҙәһен матур итеп дөрөҫ һәм тура тотҡан гүзәл зат егеттәр алдында бигерәк тә нәзәкәтле күренә икән. Арҡаңды кәкрәйтеп-бөкрәйтеп торһаң, хатта косметика, модалы кейемдәр ҙә ярҙам итмәй.

Умыртҡа һөйәге – кеше организмының үҙәге. Һаулығыңа ла битараф булырға ярамай. Шуның өсөн дә арҡаны төҙ тотоп йөрөү бик мөһим. Юғиһә, дөрөҫ үҫешмәгән умыртҡа һөйәге төрлө нервы ауырыуҙарына, күрәү һәләтенең насарайыуына ла килтерергә мөмкин.



Ни өсөн умыртҡа һөйәге дөрөҫ үҫешмәй һуң? Табиптар быны ҡайһы бер алама ғәҙәттәр менән бәйләп аңлата:

**1. Уҡыу әсбабтары менән тулы ауыр сумканы иңеңә һалып йөрөтөү.**

**Кәңәш:** Ауыр сумканы бер яҡ иңгә генә һалып йөрөтөү һөйәктәргә артыҡ ауырлыҡ өҫтәп, уларҙың кәкрәйеүенә килтерә. Төрлө китап-дәфтәрҙәреңде рюкзакка урынлаштырыу уңайлыраҡ та, дөрөҫ тә булыр.

**2. Парта артында алға артыҡ нык эйелеп, йә иһә бер яҡҡа кәкрәйеп ултырыу.**

**Кәңәш:** Арҡаны тура тотоп, ултырғысҡа терәп ултырырға кәрәк. Һөйәктәр ауыртып киткән хәлдә, урыныңдан тороп күнегеүҙәр эшләп ала алаһың.

**3. Бик йомшаҡ урында йоҡлауға күнегеү.**

**Кәңәш:** Әүен баҙарына китеү өсөн йомшаҡ мамыҡ урынға ҡарағанда, ҡаты матрас һайлау күпкә яҡшыраҡ.

**4. Кәрәгенән күберәк ашап, артыҡ килограмдар йыйыу, һимереү.**

**Кәңәш:** Артыҡ килограмдар умыртҡа һөйәгенә өҫтәмә ауырлыҡ өҫтәй. Шуның өсөн дә дөрөҫ туҡланыу режимы алып барырға, һимереүҙән һаҡланырға кәрәк.

**5. Һәр ваҡыт бейек үксәләрҙә йөрөү.**

**Кәңәш:** Аяҡтарҙы ҡыҫмаған уңайлы аяҡ кейеме кейергә кәрәк. Матур-матур зауыҡлы бейек үксәләрҙе айырым осраҡтарҙа, төрлө кисәләргә, байрамдарға ғына кейеү яҡшыраҡ.

Статистика буйынса, умыртҡа һөйәгенең дөрөҫ үҫешмәүе һәр өсөнсө үҫмерҙә күҙәтелә. Бигерәк тә ҡыҙ кешеләр арҡа һөйәгенең ауыртыуына күп зарлана. Был организмдың ҡатын-ҡыҙҙарға ғына хас физиологик үҙенсәлектәре менән бәйле.

Умыртҡа һөйәге ауырыуҙарын профилактикалау өсөн көндәлек тормошта ябай ғына ҡағиҙәләрҙе үтәү, ҡайһы бер ауыр булмаған күнегеүҙәрҙе башҡарыу ҙа етә.

**1.** Өйҙә йыйыштырғанда, кер, иҙән йыуғанда ваҡыты-ваҡыты менән булһа ла бер ҡулдың буш булыуы мөһим. Был саҡта умыртҡа һөйәге ваҡытлыса ғына булһа ла ял итә.

**2.** Сәң һурҙырғанда ла эйелергә ярамай, арҡа һәр ваҡыт төҙ генә булырға тейеш.

**3.** Ауыр әйберҙәрҙе эйелеп түгел, ә саҡ ҡына тубыҡтарҙы бөгөп, кәүҙәне тура тотҡан көйө күтәреп алырға кәңәш ителә.

**4.** Аяҡ кейемдәрен кейгәндә бер яҡ тубыҡҡа тубыҡланып ултыралар.

**5.** Күп кенә топ-моделдар кеүек, баш осоңа китап һалып, тигеҙлекте һаҡлап йөрөү кәүҙә нәфислеген һаҡларға ярҙам итер.

**6.** Тубыҡланып иҙәнгә ҡулдарың менән таян да, арҡаңды 10 секунд һайын бер өҫкә, бер аҫҡа бөк. Был күнегеү умыртҡа һөйәктәре өсөн бик файҙалы.

Гүзәл зат һәр ваҡыт матур булып ҡалырға тейеш. Бөкрәйеп йөрөү бер кемде лә йәмләмәй. Башыңды ғорур, кәүҙәңде тура тотоп һәр саҡ алға атла. Шул саҡта үҙеңде яратырҙар, юлдарың да уң булыр, иғтибар үҙәгенән дә ситтә ҡалмаҫһың, үҙ-үҙеңдән дә ҡәнәғәт булырһың.

**Нәркәс АЛСЫНБАЕВА әҙерләне.**

## Һағынам

Мин дә һеҙгә үҙем менән булған хәлде яҙырға тәүәкәлләнем. Дөйөм ятаҡҡа күскәс, күпме егеттәр булһа ла, уларға күҙ һалмай йөрөнөм. Дуҫтарым: “Ниңә егетең юҡ, тап үҙеңә берәйһен,” – тип гел әйтә торғайнылар. Тик күңелгә береһе лә оҡшаманы.

Берҙән-бер көндө дуҫтарым менән һөйләшеп ултырғанда Р. беҙҙең араға килеп һөйләшеүгә ҡушылды. Ошо көндән башлап беҙ аралаша башланыҡ, бер-беребеҙҙе оҡшатҡандай булдыҡ. Бер көндө ул мине кафеға саҡырҙы һәм оҙатҡанда: “Мин һине ярата башланым шикелле,” – тине. Мәңгелеккә бергә ҡалырбыҙ тип, анттар бирҙек. Тик ул: “Һин мине ташлаясаҡһың, әрме сафтарынан ҡайтыуымды көтмәйәсәкһең,” – тине. Бар донъямды онотоп: “Көтәм, көтәсәкмен,” – тинем.



Бына каникулдар ҙа етте. Мин үҙемдең ауылыма ҡайтып киттем, ә ул практика үтергә үҙҙәренә ҡайтты.

Бер көндө ят номер шылтыратты. Р-ның дуҫы булып сыҡты.

– Р.-ны онот, уның ауылда ҡыҙы бар, - тине.

Шул саҡта йөрәгем икегә ярылғандай булды, үҙемә урын таба алмай оҙаҡ ыҙаландым.

Практикаһын тамамлап килгәндән һуң күрҙем Р.-ны. Бөтәһен аңлатып бирһен өсөн күпме осрашырға, һөйләшергә кәрәк,тип әйтеп ҡараным. Тик бер нисек тә һөйләшеп булманы. Мин Р.-ны әле лә көтәм, һағынам, ағымлы күҙҙәрен иҫкә төшөрөп, илап та алам.

**Ҡояш.**

## Һаман һөйәм

Төндәр буйы мин уйлайым,
Һөйгәнем, һине генә.
Айға ҡарап йыуанам мин,
Һин булмағас эргәмдә.

Кисә генә серле төндә
Ултыра инек икәү.
“Мин тик һине һөйәм”, - тиеп
Әйтә торғайны берәү.

Тик һин киттең минең яндан
Икенсе һылыу ҡыҙға.
Икәү бергә йөрөйһөгөҙ
Күгәрсен һымаҡ ҡына.

Әгәр һеҙҙе күрһәм юлда,
Ҡаным ҡайнаған төҫлө.
Эстән генә йөрәк илай,
Тик һаман һөйәм көслө.

**АЙГИЗӘ.**

## Яратамы, яратмаймы?

Синыфташымды яратып йөрөйөм. Мин уны беренсе синыфтан уҡ оҡшатам. Исемен И. Ф. тип ҡуям. Беҙ ете йыл бергә уҡыйбыҙ. Яратҡанымды унан йәшереп йөрөнөм. Бер көндө яҡын дуҫым И. Ф.-ға ғашиҡ булыуын һөйләне. Аҙаҡ минән: “Ә һин кемде яратаһың,” – тип һораны.




Мин: “Береһен дә яратмайым,” – тип яуап ҡайтарҙым. Дуҫым менән уны бүлешеүҙән, талашып, асыуланышып йөрөүҙән ҡурҡтым.

Бер көндө миңә хат килтереп бирҙеләр. Хат алтынсыла уҡыған Рөстәмдән булып сыҡты. Ул үҙенең һөйөүен белдергән! Мин ике туған ҡустымдан, Рөстәм шаяртамы әллә юҡмы, тип һорарға барҙым. Ришат : “Бер көндө малайҙар менән һөйләшеп торғанда, һинең турала һөйләшеп киттек тә, кемдәр һиңә ғашиҡ булғандарын һөйләнеләр,” – тине. “Кемдәр?” – тигәйнем. “ Һине Денис та, Рәил дә, Рөстәм дә, Илназ да һәм И. Ф.-ла ярата икән,” - тине. Ҡапыл өсөнсө синыфта булған хәл иҫкә төштө.

“Йәгеҙ әле, ҡыҙҙар!” ярышы бара ине, И. Ф. жюриҙа ултыра. Шунда ул миңә беренсе урын биргәйне һәм 8 мартҡа бүләкте лә үҙе тапшырҙы.

Етенсе синыфҡа уҡырға беҙгә бер ҡыҙ килде. И. Ф. хәҙер уның артынан йөрөй. Рөстәм менән яҡын дуҫтарбыҙ. Әлеге ваҡытта минең арттан бер егет йөрөй. Ришат : “Ул ысынлап та һине ярата шикелле,” – ти.

Бына шундай ул тормош. Ни эшләргә лә, ниндәй ҡарарға килергә лә белмәҫһең, дуҫтар.

**Н.**

## Бәлки

Ай һәм Ҡояш, Ер һәм һауа
Булһын ине бер бөтөн.
Бәйләһен ине уларҙы
Мөхәббәт уты өтөп.
Бәлки шул саҡ һинең менән
Булырбыҙ бергә - бергә.
Шунда беҙгә төшөр өлөш
Бәхет нурын һибергә….

**Һыуһылыу.**

# Өс үлсәмле донъя серҙәре...

Төрлө реклама сығарылыштарҙа һеҙ йыш ҡына **3D** технологиялар



тураһында ишетәһегеҙ. Уның бик матур сифатлы картина икәнен беләһегеҙҙер, ә бына ҡайҙан һәм нисек килеп сыға һуң ундай күренеш? Беҙҙеңсә ул өс үлсәмле күренеш тип атала. Беҙ һүрәттәрҙә күргән ике үлсәмле (тигеҙ) яҫылыҡтан айырмалы рәүештә, бында киңлек кенә түгел, йыраҡлыҡ та күҙ алдына баҫа. Йәғни, беҙ тормошта үҙ күҙҙәребеҙ менән күргән ысынбарлыҡты картиналар ҙа кәүҙәләндерә ала.



Әгәр һеҙ кеше күҙенең төҙөлөшө менән таныш булһағыҙ, уның нисек эшләүен беләһегеҙҙер. Ике күҙҙең һәр береһе донъяның һәр нөктәһен айырым бер мөйөштән ҡарап, шул ике күренеш мейелә бергә ҡушыла һәм һөҙөмтәлә дөйөм бер картина хасил була. 3D ысулында ла һәр күҙ өсөн айырым картина булдырыла. Быны 1858 йылда уҡ француз Джозеф Альмедиа уйлап тапҡан. Ул ике күҙгә ике төҫлө һүрәт эшләп, уларҙы төҫлө фильтр аша ҡарау аша берҙәм, әммә күләмле картина килтереп сығара алған. Күҙлек



фильтрҙары аша һүрәтте күләмлегә әйләндереү күптән ҡулланыла, Өфөлә үҙған быуатта уҡ Ю. Гагарин исемендәге кинотеатрҙа шундай кинолар күрһәтелде. Ике күҙ өсөн һүрәтте механик рәүештә тарҡатыу ысулы беҙҙең журналда сығып килгән “Серле һүрәт” рубрикаһында ла ҡулланыла.

Һүрәтте ике төҫкә бүлеү аша “күләмләндереүҙә” ҡыҙыл һәм зәңгәр быялалы күҙлек ҡулланыу талап ителә. Ул ярайһы уҡ матур картина бирә, әммә дальтониктар өсөн бармай. Шундай уҡ, әммә полярлаштырыусы күҙлектәр шулай уҡ матур картина күрергә ярҙам итә, әммә бының өсөн махсус экран һәм проектор талап ителә. Затворлы күҙлектәрҙә мейене алдап ысынбарлыҡҡа ҡарау күренеше ике күҙлек-мониторҙың алмаш-тилмәш эшләүенән барлыҡҡа килә. Әммә был күҙҙәрҙе бик тиҙ талдыра.

Виртуаль ысынбарлыҡты 3D форматында күрһәтеүсе махсус шлемдарҙа һәр күҙ өсөн айырым күҙлек-монитор ҡулланыла. Уларҙың сифаты бик юғары, әммә мониторҙарҙың күҙлек быялаһы арауығында ғына урынлашыуы уларҙы күҙҙәр өсөн хәүефле итә.



Һуңғы арала бер кеше өсөн махсус 3D монитор ҙа эшләнгән. Уларҙа һүрәтте ике күҙ өсөн бүлеү экрандың үҙендә уҡ башҡарыла. Әммә шунһыһы уңайһыҙ: был мониторҙан күҙҙәреңде тик бер алыҫлыҡта ғына тоторға кәрәк.

Телевидение үҙ эшендә “күләмле” картина килтереп сығарыу өсөн Пульфрих эффекты тигән ысулды ҡуллана. Ул кеше мейеһенең ҡараңғы картиналарҙы яҡтыларынан һуңлабыраҡ ҡабул итеүенә нигеҙләнгән.

# “Ил ижады – аҫылташ”

## Мәмерйә эсендә

Балаларҙың быға тиклем мәмерйәләр буйлап йөрөгәне юҡ ине. Улар яғында мәмерйә-кәпүәләр тураһында ишетелгәне лә юҡ. Нисек әле был ташөй һаманға тиклем береһенең дә күҙенә салынмағандыр? Ниндәй генә ҡара урман булмаһын, кеше йөрөмәй тормай, ҡасан да булһа берәйһе килеп сығып, хәбәр таралмай тормаҫ ине лә.

– Ай-һай, ниндәйҙер сере бар бының, - тип тәрән уйға сумды Айнур. – Хәйер, беҙ бит серҙәр эҙләп сыҡҡайныҡ, бына ул – алдыбыҙҙа бығаса булмаған асыш!

– Иҫ китерлек бер нәмәһе лә юҡтыр, шуға әһәмиәт бирмәгәндәрҙер, – тигән булды Илнур. – Ҡарап ҡарайыҡ башта.

Икенсе усаҡ яҡтырта алған күренеш балаларҙы хайран итте! Улар ысын мәғәнәһендә ҙур зал тип атай алырлыҡ таш бүлмәнең эсендә баҫып тора инеләр. Тау башында булғанғамылыр, иҙәне лә ҡоро, ут яҡтыһы хатта түбәһен дә буйламай. Түңәрәк тирмә эсен хәтерләткән майҙан ситендә ялҡын шәүләләре саҡ барып еткән урындарҙа тағы ла артабан дауам иткән ике тишек күренә...

– Ай-һай, – тип һоҡланды Айнур ут яҡтырта алған тирәләрҙе байҡап байтаҡ ҡына тын торғас, - шәп ергә килеп юлыҡтыҡ түгелме?

– Үәт исмаһам табыш! – тип шатлығын йәшермәне Илнур ҙа. – Берәйһе хазина ла йәшереп ҡалдырмаған микән бында?

– Малайҙар, нимә таптығыҙ унда? – тигән тауышы килде тәүге усаҡ янында ҡалған Гөлнурҙың. – Сығығыҙ тиҙерәк, мин ҡурҡам!

– Сыҡмайынса булмай, – тине Айнур, үҙенең башлыҡ икәнен иҫенә төшөрөп. – Аҫтағы лагерыбыҙға барып әйләнеп, ентекләберәк әҙерләнеп килмәй булмаҫ бында. Күрәһең бит, бындай яҡтылыҡ менән әллә ни ҡылып булмай, ике метрҙан да ары бер ни күренмәй...

* * *

– Был мәмерйә әлегә беҙҙең өсөбөҙҙөң генә сер булып ҡалырға тейеш, – тип һаман дуҫтарына нотоҡ уҡыуын дауам итте Айнур. – Үҙегеҙ беләһегеҙ, утыҙ ике тештән ысҡынған – утыҙ ике илгә китә. Халыҡ ябырылдымы, был ер юҡҡа сыҡты, тигән һүҙ.

– Беҙгә тиклем береһе лә тапмаған өсөн кемгә рәхмәт әйтергәләр әле? – Башлыҡ




(Өмәнең дауамы. Шарты журналдың 4 – се һанында донъя күрҙе.)






менән һүҙһеҙ килешеүҙәрен Гөлнур шулай сәйер аңлатты. Улар түбәндәге лагерҙарына барып, унда булған барлыҡ кәрәк-яраҡты тейәп килеп, инде мәмерйә эргәһенә лагерь ҡороп урынлашҡайнылар инде. Шулай булырға тейеш һымаҡ ҡына хәл ителде был аҙымдары. Ауылға ҡайтырға кәрәклеге лә онотолдо, берәй көнгә генә һуңлап киткәндән береһе лә юғалтып аптырамаҫ, тинеләр шикелле. Маҡсат анығ: мәмерйәне мөмкин тиклем эскәрәк үтеп тикшереү. Әлегә шуға әҙерлек бара: күберәк утын йыйыла, ҡарағай сайыры әҙерләнә. Илнур хатта йәтешләп тороп мәмерйә алдына уның кемдеке икәнлеген билдәләгән ярлыҡ - таҡта ҡуйырға булып китте. Әле таяктан юнып яһаған таҡтасыҡҡа нимәләр яҙыу өҫтөндә баш ватыуы:

– Таштирмә тип атарбыҙ инде беҙ был торлакты. Бая уҡ шундай күренеш күҙ алдыма баҫҡайны. Йәтеш кенә исем дә кәрәк булыр. Һәм ҡасан, кемдәр тарафынан табылыуын да теркәмәй булмаҫ. Күпкә китә бит әле… – тип ысынлап тәрән уйға ҡалды ул.

– Ҡуян бала тапҡан, ҡуйыр урын тапмаған, - тип унан көлдө Гөлнур. – Исемен “Өҫдуҫ” тип ҡуй. Тик ағасҡа түгел, ташҡа ырып уҡ ҡуйырға ине лә, нисек ҡыраһың уны?

– Уныһын икенсе килгәндә лә эшләп булыр, - тип дуҫтарының мәшәкәттәрен өҙҙө Айнур. – Алға, дуҫтар, яңы мажаралар артынан! Бөйөк эштәр көтә беҙҙе!

Улар тағы ла ҡәпүә эсенә юлландылар. Көндөң ҡыҫкә һарҡа башлауы ла борсоманы уларҙы. Ниңә борсолорға – мәмерйә эсендә былай ҙа ҡараңғы бит! Яҡтылыҡты үҙҙәре тәьмин итәсәк улар был юлы. Илнур хатта балыҡсылар сыраҡҡа төшкәндә ҡуллана торған сайыр һалып яндырғыс күсермә сыра ла әтмәләп алды.

– Иғтибарлыраҡ булығыҙ, - тип тағы иҫкәртте дуҫтарын Айнур. – Күҙгә салынмаған ваҡ нәмә булырға тейеш түгел. Иң мөһиме – беҙгә тиклем бында кеше булғанмы, шуның эҙҙәрен самаларға кәрәк.

– Тәүтормош кешеләре төйәгенә генә юлыҡмаһаҡ,– тигән һығымта яһаны Илнур әллә ихлас теләктән, әллә былай ғына.

Эреле-ваҡлы таштар аунап ятҡан, түбәһендә бихисап ярғанаттар эленеп торған ҙур залды ҡарап сығыу бер ни ҙә бирмәне. Әллә сыраның яҡтылығы етмәй, әллә ысынлдап та бында бер ниндәй ҙә эҙҙәр юҡ. Кәм тигәндә Шүлгәндәге һымаҡ тәүтормош кешеләренең тамғаларын осратырға ниәтләгән Илнурҙың бынан кәйефе ҡырылды. Ысынлап та, мәмерйә тип әйтерлек ниһе бар әле: ни бағаналай аҫылынып төшкән һәм өҫкә үрләгән сталактиттар менән сталагмиттар юҡ, сылтыраған һыу тауышы ла ишетелмәй. Бары тыштағынан саҡ ҡына һалҡынраҡ та, әлеге шул ярғанаттар инде. Улар ҙа әллә ни һоҡланырлыҡ ҡоштар түгел, сысҡандың осоп йөрөүе генә ғәжәпләндермәһә.

Баяраҡ ҡарайып күренгән ике эске ишектең береһе шулай уҡ бер табыш та килтермәне. Мәмерйә эсендәге кескәй мәмерйә булып сыҡты ул – ике метр тирәһе бара ла, бөтә лә ҡуя. Сыра яҡтыһында ҡытыршы стеналарында ла бер ни тойолманы. Шулай ҙа быныһында еүешлек һиҙелә ине, Айнур иҙәнендә бер аҙ соҡсонғас, һыу күләүегә лә барлыҡҡа килде хатта.

Быныһынан саҡ ҡына ситтәрәк урынлашҡан икенсе ишектән малайҙарға шунда уҡ һалҡынлыҡ бөркөлдө. Һалҡынлыҡ ҡына түгел, ҡайҙандыр тәрәндән килгән дымлы һауа тулҡыны һымаҡ ине ул.

– Ошолор был мәмерйәнең дауамы, – тигән һығымта яһаны Айнур. – Сыраны яңыртып киләйек әле…

**(Дауамы бар)**

# БАДМИНТОН

Беҙ был спорт төрөн бала-саға уйыны тип ҡарайбыҙ. Оло теннистағы һымаҡ ракеткалар менән ҡауырһындай еңел осҡос-воланды бер-береңә ҡыуып, ергә мөмкин тиклем оҙағыраҡ төшөрмәй тотоуҙан ғибәрәт ул. Ҡарамаҡҡа еңел генә күренгән был уйын 1992 йылдан Олимпия спорт төрҙәренә индерелгән. Уны Һиндостанда хеҙмәт иткән инглиз офицерҙары алып ҡайта. Һиндтарҙа пуна тип аталған был уйын Англияла ла таралып, 1893 йылда бадминтон ассоциацияһы төҙөлә һәм рәсми ҡағиҙәләр раҫлана. Исеме иң беренсе махсус уйын майҙансығы төҙөлгән (13 x 6 метр) усадьба исеменән алынған.



1934 йылда Бөтөн донъя бадминтон федерацияһы төҙөлөп, 1947 йылда ирҙәр араһында беренсе ҙур ярыштар – Томас кубогы уйнатыла. 1955 йылда иһә ҡатын-ҡыҙҙар араһында Убер кубогы уйнатыла башлай. Бадминтонды берәрләп һәм икешәр кешелек командалар махсус майҙансыкта уйнайҙар. Исәп теннистағы һымаҡ – воланды сетка аша ҡаршы яҡта ергә төшөрә алған кешегә очко яҙыла.

Әлеге ваҡытта бадминтон Азия илдәрендә киңерәк таралған. Һиндостанда үткән былтырғы донъя чемпионатында биш алтын миҙалдың дүртәүһе ҡытайҙарға



эләкте. Рәсәй халыҡ-ара ярыштарҙа ҙур урындарға сыға алғаны юҡ. Әлеге ваҡытта ирҙәр араһында Рәсәй чемпионы Станислав Пухов, ҡатын-ҡыҙҙарҙан Һамарҙан Элла Карачкова был титулды ун тапҡыр яулаған, парҙар арһында иһә Виталий Дуркин – Александр Николаенко менән Нина Вислова һәм Валерия Сорокинаға етеүсе юҡ.

1957 йылда Мәскәүҙә үткән Бөтә донъя йәштәр һәм студенттар фестивалендә бадминтон тәүләп уйындар программаһына индерелә. Ә 1962 йылда илебеҙҙә Ете ҡала турниры үткәрелә һәм унда Мәскәүҙең "Труд" командаһы еңеп сыға. 1967 йылда СССР халыҡ - ара ярыштар кимәленә сыға һәм ГДР командаһы менән 2:2 иҫәбенә уйнай. Рәсәйҙә Халыҡ-ара Гран-при уйындарының Rusian Open этапы үткәрелә. Быйыл Владивостокта үткән был ярыштарҙа беҙҙекеләр барлыҡ биш финал уйынына ла сығып, өсәүһендә алтын миҙал яуланылар. Рәсәй дәүләт физик культура университетында бадминтон буйынса тренерлыҡҡа укыталар.



Ситтән еңел генә күренһә лә, бадминтон шаҡтай ҙур әҙерлек талап итә. Профессиональ бадминтонсылар тиҫтәләгән йылдар шөғөлләнә. Уйын ваҡытында воландың тиҙлеге сәғәтенә 400 саҡырымдан уҙып китә. Бер матч ваҡытында уйынсылар унар саҡырым йүгереп, бер нисә килограмм ауырлығын юғалта.



# Йәрмәкәй районы





Район Башҡортостандың көнбайышында, Татарстан менән Ырымбур өлкәһе сигендә, дала ерҙәрендә урынлашҡан. 1935 йылда, Бәләбәй районының бер өлөшөн бүлеп сығарып барлыҡҡа килгән. 54 ауылда 16 мең кеше, күпселектә башҡорттар йәшәй. Район үҙәге – Йәрмәкәй ауылы. Ыҡ йылғаһы аға, Өфө – Һамар тимер юлы үтә.



Гербында урталайға бүленгән йәшел һәм зәңгәр фонда үрәпсегән алтын толпар төшөрөлгән. Уның өҫтөндә даға һәм башҡорттарҙың милли биҙәге – ҡуҫҡар элементтарын берләштергән символ һынландырылған. Йәрмәкәй районы төрлө кимәлдәге бәйгеләрҙә еңеүҙәр яулаусы аттар үрсетеүе менән дан тота. Ат – башҡорттоң яуҙа ла, эштә лә айырылғыһыҙ юлдашы, тоғролоҡ, аҡыл һәм уңғанлыҡ билдәһе. Алтын ҡуҫҡар ерле халыҡтың игенселек һәм малсылыҡ менән шөғөлләнеүе тураһында һөйләй. Ә даға – ырыҫ һәм бәхет символы.

Флагы – урталайға йәшел һәм зәңгәргә бүленгән дүрткел туҡымала төшөрөлгән үрәпсегән алтын ат һыны.

2006 йылда ҡабул ителгән.

Авторы – Айрат Усманов.



# Киләсәк транспорты

Кешелек әлегәсә ирешкән барлыҡ техник ҡаҙаныштар ҙа алға ҡарай белгән хыялыйҙар емеше, тиергә мөмкин. Тап шулар фәндә һәм тормошта яңынан-яңы асыштар яһай, улар артабан беҙҙең әйләнешебеҙҙә ғәҙәти күренеш булып китеп, йәшәйешебеҙҙе еңеләйтә.

Яңы быуатты әүҙем хәрәкәт дәүере тиергә мөмкин – һәр кешенең тиерлек шәхси транспорты бар, халыҡ тегеләй-былай өҙлөкһөҙ һауа, диңгеҙ, ҡоро ер транспортында ла йөрөүҙән туктамай. Был кешелек алдына тағы бер ҙур мәсьәләне ҡуя – киләсәк транспорты ниндәй булырға тейеш? Өҫтәүенә, белгестәр иҫәпләүенсә, ер йөҙөндә нефть яткылыктарының тағы утыҙ йылға ғына етеүен иҫәпкә алғанда, техниктар күптәнән альтернатив транспорт саралары эҙләү менән мәшғүл.

Фантастик киноларҙа күрһәтелгәнсә, һауа транспортын төп хәрәкәт итеү сараһы итеү идеяһын белгестәр шундуҡ кире ҡаға: уларҙың



1

(самолет, дирижабль, вертолет) ыңғай яктарынан кире яктары күберәк. Төп мәсьәлә бында – ерҙең тартыу көсөн еңеү өсөн бик күп энергия талап ителеүендә. Тап шуның өсөн, мәҫәлән, иң уңайлы транспорт булған вертолеттың бер сәғәт осоуы 20 мең долларҙан аша! Ә самолеттар тик бик алыҫ араларҙа ғына үҙен аҡлай.

Ҡоро ер транспортының ниндәй төрҙәре генә тәкдим ителмәгән? Шулай ҙа яҡын киләсәк транспорты барыбер электромобилдәр булыр моғайын. Быға экологик талаптарҙың ҡатылана барыуы ла, электр энергияһының сағыштырмаса арзан булыуы ла булышлыҡ итә. Әлегә электромобилдәрҙең төп етешһеҙлеге – энергияны күпләп запасҡа һаҡлап булмауы. Киләсәктә, күрәһең, был мәсьәлә техник яктан хәл ителер. Ҡалаларҙа быны әле үк эшләү мөмкинлеге бар (ҡала эсендә техника күп булыу сәбәпле, тиҙлектәр ҙур түгел, халыҡ эшкә барып ҡайтыр өсөн генә машина ала), ләкин бензинға өйрәнгән халыҡты яңы транспорт төрөнә өйрәтеү өсөн ниндәйҙер мәжбүри саралар кәрәк буласаҡ. Өлгөләр ҙә бар – трамвай менән троллейбус беҙҙә күптәнән файҙаланыла.


2

Шулай ҙа ҙур ҡалаларҙа юлдар һәм урындар етмәүе төп мәсьәлә булып ҡаласаҡ. Быны хәл итеү өсөн техник “хыялыйҙар” аҫылмалы юлдар ҙа тәкдим итә, ер аҫты һәм торбалар транспортын да йәйелдереү тураһында баш вата... Аҫылмалы юлдар урын һәм тығындар проблемаһын хәл итә алһа ла, үтә ҡиммәткә төшөүе асыҡланған. Һәм улар тик маршрут транспорты итеп файҙаланыу өсөн генә ҡулай. Ә кешегә иһә үҙ транспорты теләгән ергә йөрөй алыу уңайлылығы менән яҡын. Тимәк, был йүнәлештә йәш новаторҙарға эшләргә лә эшләргә әле.



3

**ҺҮРӘТТӘРҘӘ:**

1. Рәсәй конструкторҙары Дмитрий һәм Тимофей Рябкиндар һыу аҫты мотоциклы эшләгән. Ул аккумуляторҙа эшләй, 12 метр тәрәнлеккә төшә ала.

2. Яңы Зеландиянан Джеффи Парнет аҫылмалы монорельс юлы төҙөгән. Тик бында кешеләр велосипедтағы һымаҡ педаль әйләндерәләр.

3. Швейцариянан Луи Палмер ҡояш батареяһында эшләүсе электромобиль яһаған һәм уның менән 18 илде урап сыҡҡан. Был машинаның ҡояшһыҙ көндә 100 саҡырым үтерлек запасы бар, 90 саҡырым тиҙлектә йөрөй ала.

2020 йылға ер йөҙөндә транспорттың 10 процентын электромобилдәр тәшкил итәсәк, тип иҫәпләгән французлар “Рено” электромобилдәрен күпләп сығарарға тотонған. Был матур машина сәғәтенә 135 саҡырым тиҙлектә 160 саҡырым үтә ала. Ағыулыкты тултырыуҙың өс юлы бар: өйҙәге розетканан 6-8 сәғәт эсендә; махсус станцияла юғары көҡәт ярҙамында 30 минут эсендә; аккумуляторҙы алмаштырып ҡуйыу аша өс минут эсендә.











# Башваткыс



## “Һандар боксы”

Кем күҙлерәк икәнен белер өсөн һәр һүрәттең һандарын ҡушып ҡарарға кәрәк.



## Ике оҡшаш һүрәтте табығыҙ.



## Хәтереңде тикшер әле!

Был һүрәттәрҙәге ҡуян, тейен һәм айыуҙарҙы тәртип буйынса һанап сығығыҙ. Берегеҙ тикшереп барһын, ә икенсегеҙ былай һанарға тейеш: беренсе ҡуян, беренсе тейен, икенсе ҡуян, беренсе айыу ... һәм артабан аҙаҡҡа тиклем. Яңылышҡас, икенсегеҙ һанай башлай ала, ә беренсегеҙ тикшереп тора.

1. Ике малай бер нәмә алдында туҡтап ҡалған. “Был ҡара”, – тигән беренһе. “Юҡ, был – ҡыҙыл,” – тигән икенсеһе. “Ә ниңә ул аҡ һуң, улайһа?” – тип һораған беренсеһе яуабына. “Сөнки ул йәшел әле”, – тип яуаплаған икенсеһе. Нимә тураһында һүҙ бара?

* * *

2. Ниндәй һүҙ өс “Г” хәрефенән башлана һәм өс “Я” хәрефенә тамамлана?

* * *

3. Малай киске һигеҙҙә йоҡларға ята һәм сәғәтте иртәнге туғыҙҙа уятырға ҡуя. Ул нисә сәғәт йоҡлаясаҡ?

* * *

4. Африкала бер төрмә бар: ул таштан һалынмаған, бурап эшләнмәгән, зиндан итеп ергә лә ҡаҙылмаған. Енәйәтселәрҙе ҡайҙа бикләйҙәр?

* * *

5. Нисә балыҡ эләктерҙең, тип һорағандар балыҡсынан. “Һигеҙҙең яртыһы, башһыҙ алты һәм ҡойроҡһоҙ туғыҙ”, – тип яуап биргән ул. Нисә балыҡ тотҡан инде ул?

* * *

6. Совет заманында урам һепереүселәргә ҡыҫҡа һаплы һепертке бирә торғайнылар. Ни өсөн?

**Яуаптар:**

1. Сей ҡарағат турһында. 2. Тригонометрия. 3. Бер сәғәт кенә, сөнки сәғәт иртә-кис юк. 4. Төрмә баобаб ағасының эсенә яһалған. 5. Бер балыҡ та тотмаған - 0. 6. Һепертке таяғына таянып тик тормаһын өсөн.

# КӨЛӘМӘСТӘР

**Парашют менән һикергәндә укытыусы апай үтә ғәжәпләнгән, таң калған, кото оскан, тик был тойғоларҙы ниңәлер бөтөнләй икенсе һүҙҙәр менән аңлаткан.**

* * *

Психиатр ауырыуға:

– Ҡотларға мөмкин: һеҙ төҙәлеүгә бараһығыҙ.

– Ниндәй ҡотлауҙар, ниндәй төҙәлеү – бер ай элек мин Наполеон инем, ә хәҙер – бер кем дә түгел!..

* * *

**Киләсәктә, кешелек ерҙән түгел, һауанан йөрөй башлағас, Рәсәйҙә бар һауа юлдары ла соҡор-саҡырлы буласаҡ.**

* * *

Ҡыҙ – егеткә:

– Ниңә миңә шул тиклем ҡарайһың?

– Минең һиңә ҡарағым да килмәй әле!

– Аңламаным, ни өсөн ҡарағың да килмәй әле?..

* * *

**– Һылыу, һеҙҙең телефонығыҙ ниндәй?**

**– Ҡып-ҡыҙыл ғына.**

**– Юҡ, номеры ниндәй, тием.**

**– Федераль номер.**

**– Ю-ук, һандары ниндәй, тием!**

**– Ғәрәп һандары…**

* * *

Малай ағас башына үрмәләй. Уға аҫтан иптәше ҡысҡыра:

– Ҡайҙа киттең? Нишләйһең унда?

– Алма ашағым килә.

– Алйот, был бит ҡайын!

– Үҙең алйот! Алма минең кеҫәмдә ята.

* * *

**– Компотты емештәрҙән генә ҡайнаталармы, әллә йәшелсәләрҙән дә мөмкинме?**

**– Йәшелсәнән ҡайнатһаң, борщ килеп сыға!**

**Тышлыктын 1-се битендә – Юлай Кәримов фотоһы.**


АМАНАТ©

**Республика балалар-үҫмерҙәр журналы**

**Республиканский детско-юношеский журнал**

**№ 08 (801), Август, 2010**

Ойоштороусылары: Башҡортостан Республикаһының «Аманат» журналы редакцияһы ҡаҙна предприятиеһы һәм Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ҡарамағындағы Матбуғат, нәшриәт һәм полиграфия эштәре буйынса идаралыҡ.

Учредители: Казенное предприятие Республики Башкортостан Редакция журнала «Аманат» и Управление по делам печати, издательства и полиграфии при Правительстве Республики Башкортостан.

**Баш мөхәррире – Сәлмән ЯРМУЛЛИН**

Мөхәрририәт:

Артур СУРИН, Салауат СӘҒИТОВ, Артур ИҘЕЛБАЕВ, Азамат ЮЛДАШБАЕВ, Фәрзәнә ҒӨБӘЙҘУЛЛИНА, Дамир ШӘРӘФЕТДИНОВ (яуаплы сәркәтип), Нурия ӘХТӘМОВА (бүлек мөхәррире), Артур ТАПАҠОВ (биҙәлеш мөхәррире).

1929 йылдың мартынан нәшер ителә.

Айына бер тапкыр башкорт телендә сыға.

Урта һәм оло йәштәге мәктәп балалары өсөн.

Издается с марта 1929 года.

Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

Для детей среднего и старшего школьного возраста.

Киң коммуникациялар, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау даирәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт тарафынан 2007 йылдың 21 декабрендә теркәлде.

Журналды теркәү тураһында таныклык ПИ № ФС77-30612

Зарегистрирован Федеральной службой по надзору в сфере массовых коммуникаций, связи и охраны культурного наследия 21 декабря 2007 года.

Свидетельство о регистрации ПИ № ФС77-30612



БЕҘҘЕҢ АДРЕС:

450001, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2. «Аманат» журналы редакцияһы.

450001, Республика Башкортостан, г.Уфа, проспект Октября, 2. Редакция журнала «Аманат».

ТЕЛЕФОНДАР:

баш мөхәррир – 277-73-46; яуаплы сәркәтип – 277 - 74 - 80; компьютер бүлеге - 223 - 91 - 83

e-mail: amanat@yandex.ru

Беҙҙең сайт: http://www.journal-amanat.ru



РЕКВИЗИТТАР:

г. Уфа, ИНН 02 78 02 12 11, КП РБ Редакция журнала "АМАНАТ"
р/с 40602810700000000017, в филиале ОАО "УралСиб",
к/с 30101810600000000770 БИК 048 073 770

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты» дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.

Адресы: 450001, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2.

Отпечатано в Государственном унитарном предприятии Республики Башкортостан «Уфимский полиграфкомбинат».

Адрес: 450001, Республика Башкортостан, г.Уфа, проспект Октября, 2.

Редакция һеҙҙән килгән хаттарҙы иғтибар менән ҡарай, яҙышып тороуығыҙ өсөн шатлана. Әммә һәр берегеҙгә яуап бирә алмай. Беҙҙең материалдарҙы файҙаланғанда «Аманат» журналына һылтаныу мотлаҡ.

Баҫырға ҡул ҡуйылды 12.07.2010. Ҡағыҙ форматы 84x108 $^{1}/_{16}$. Офсет ысулы менән баҫыла. Күләме 2,25 баҫма табаҡ, 6,05 иҫәп-нәшриәт табағы. Тиражы 11341. Һатыуҙа – хаҡы ирекле. Заказ № 2.0099.10

Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агентства по печати и массовым коммуникациям.

# Фотоға төштөк әле...





Белем байрамы етеүгә,
Тотоп мәктәпкә китеүгә,
Күтөп тор мине, гөләм –
Яуларбыҙ белем илен!

**Айгүзәл Байбулова,
Әбйәлил районының
Михайловка ауылы.**

Йәйҙәр үтеп бара,
Ә мин үҫеп барам.
Үлән араһында
Аҙашмаҫҡа самам.

**Солтан Шакиров.
Учалы районының
Ҡунаҡбай ауылы.**



Табаҡ ҙурмы икән шулай?
Бәләкәйме кәбеҫтә?..
Уларҙың икеһенән дә
Мин ҙурыраҡ кәмендә!

**Дания Ҡужина,
Хәйбулла районының
Үрнәк ауылы.**



Йәй – сәскәләр донъяһы, тип
Киңерәк ҡарағанда,
Мин үҙем дә сәскә генә
Сәскәләр араһында.

**Дания Ҡужина,
Хәйбулла районының
Үрнәк ауылы.**



Бына һеҙгә бер мәсьәлә:
Кемебеҙ бында ҡурсаҡ,
Ул – оло, ә мин бәләкәй
Ике тиктормаҫ булһаҡ?

**Русалина Ҡолсорина.
Ейәнсура районының
Ҡыуат ауылы.**



Көс етмәҫлек булып үҫә
Беҙҙең яҡтарҙа еләк!
Өйгә алып ҡайтам тиеп,
Һай, талып бөттө беләк!

**Данил Ҡужин,
Хәйбулла районының
Үрнәк ауылы.**

Аманат, № 08, 2010 йыл

## Минең республикам!

**Ҡәҙерле балалар! “Минең республикам” конкурсы дауам итә.**

**Был һанда Мәсетле районы Яуыш мәктәбе уҡыусыларының ижади эштәрен һеҙҙең иғтибарға тәҡдим итәбеҙ.**

1. **“Ҡурай йыры”.** Камила Аҡбулова.
2. **“Аҡкош бәхете”.** Земфира Ғайсина
3. **“Минең ауылым”.** Алмас Мәғҙәнов.
4. **“Минең ауылым”.** Яҙгөл Юлыева.
5. **“Беҙҙең өй”.** Айгөл Хужәхмәтова.
6. **“Республикам яҙмышы - минең ҡулымда”.** Гөлсара Яңыбаева.
7. **“Ҡурайсы”.** Сәлимйән Дәүләтбаев.



1



2



3



4



5




6



7

Журналдың индексы – 73317